ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

8-14 август (урағай) 2025

№31 (1175)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Старт бирелде!**



2

**Оло бер рухи байлыҡтан...** мәхрүмләмәйек сабыйҙарҙы




7

**Туған телде һаҡлау...** уны дөрөҫ уҡытыуҙан да тора



8-10

**Әсә ҡарынындағы әңгәмә,** йәки Ахирәт тормошона ышанаһыңмы?



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Донъяла мөхәббәт һәм изгелек былай ҙа күп түгел, шуға ла уларҙы игелекһеҙ кешеләргә өләшеп, әрәм итмәгеҙ.***
***(Фридрих Ницше).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ?

***Йәй көндәре нисек үтә: тәбиғәт ҡосағында, йылға, диңгеҙ буйҙарындамы, әллә баҡсала көсөргәнешле хеҙмәт, еләк-емеш йыйыу менәнме, әллә ейән-ейәнсәрҙәр менән мәж килеү өҫтөндәһегеҙме?***



***Ынйыу ӘҺЛИУЛЛИНА, Күгәрсен районы:*** Йәйҙәрем шатлыҡҡа, яңы тәьҫораттарға тулы үтә. Бер көндө урманға йәки тауҙарға сығып, тәбиғәт ҡосағында саф һауа һулап, йомшаҡ үләндә ятып, күбәләк осҡанын күҙәтеп ял итәм. Башҡа бер көндө йылға ярына төшөп, һыуға сумып, ҡояшта ҡыҙынып, туғандар йәки дуҫтар менән аралашам. Байтаҡ көндәремде баҡсаға арнайым - көсөргәнешле хеҙмәттән һуң баҡса емешен ауыҙ итергә лә, матур сәскәләрҙең үҫеп китеүен күреп ҡыуанырға ла өлгөрәм. Еләк-емеш йыйырға сыҡҡан саҡта бал ҡорттарының тырышлығын күҙәтәм, ихата тулы хуш еҫкә һоҡланам. Ҡыҙым менән улымды һағынып килгән туғандарымдың балалары ла йәйге ялыбыҙҙы бизәй - бергәләп сәфәргә сығабыҙ, уйын ойошторабыҙ, тәбиғәт күренештәре тураһында һөйләшәбеҙ. Көсөргәнешле уҡыу йылынан һуң балаларҙың һәр көнөн иҫтәлекле, йөрәкте йылытыр аралашыуҙар, әңгәмәләшеүҙәр менән үткәрергә тырышабыҙ.

Яңыраҡ бер хеҙмәттәшем: "Ни өсөн сит илгә сәйәхәткә сыҡмайһығыҙ? Беҙ ғаилә менән, аҡса йыйып булмаһа, йыл һайын кредит алып булһа ла диңгеҙгә барабыҙ ул", - тип әйтеп ҡуйҙы. Диңгеҙ күрәм, тип, беҙҙең илгә ҡаршы булған, унылһынан да бигерәк, беҙҙең туристар иҫәбенә байып, шул аҡсаға Рәсәйгә ҡаршы ҡорал алырға ярҙам иткән ҡитғаларға китеп бармаҫмын инде! Әлбиттә, был фекеремде әңгәмәсемә әйтмәнем. Диңгеҙ тулҡындары тураһында хыялын селпәрәмә килтереүҙән ҡурҡҡан өсөн түгел. Унын мине аңламаясағын белгәнгә өндәшмәүҙе хуп күрҙем.

Башҡортостан йылғаларын бер ниндәй диңгеҙгә лә алмаштырмайым. Беҙҙең аҡҡан йылғаларҙың һыуы таҙа, саф, үҙе геүләп-шыжлап, йырлап аға. Балыҡ юҡ, һыу бысраҡ йәки һыуыҡ, быларҙың барыһына ла йылғаларҙы быуыу, һыуһаҡлағыстар төҙөлөү сәбәпсе, тигәндәргә лә яуабым әҙер. Балыҡ та бар, һыуыбыҙ ҙа таҙа беҙҙең. Бына яңы ғына Нөгөш һыуһаҡлағысы янындағы шифахanala ял итеп ҡайттыҡ. Сит илдекенәнән бер нәмәһе менән дә кәм түгел. Артыҡ булмаһа әле! Рәхәтләнеп үҙебеҙҙә, урында етештерелгән ризыҡ менән туҡландыҡ, һыу индек, ҡыҙындыҡ. Һәр иртә урман тауышы, ҡоштар йыры уятты. Кисен йылға өҫтөндәге ай нурҙары, ҡоштар һайрауы, яһалма диңгеҙ тулҡыны - барыһы ла рухымды күтәреп, күңелемә ҡөҙрәт өҫтәп ҡайтарҙы. Әлбиттә, диңгеҙҙәр киңерәк, тулҡыны көслөрәк, тирә-яғы икенсерәк, ә Башҡортостан йылғаларында - яҡынлыҡ, йылылыҡ, таҙалыҡ, мөхәббәт, тыуған ергә тоғролоҡ бар. Шуға күрә миңә ҙур диңгеҙҙәр кәрәкмәй, үҙебеҙҙең йылғалар имен булһын.

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаттары бәлиғ булмаған балаларына рулгә ултырырға рөхсәт иткән ата-әсәләрҙең яуаплылығын көсәйтергә йыйына.**

Республика парламентының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, Рәсәйҙең Закон сығарыусылар советына Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа санкцияларҙы көсәйтеү тураһында тәҡдим индерелгән. Әлеге ваҡытта ата-әсәләр яуаплылыҡ тотмай тиерлек: уларға иҫкәртеү яһала йәки 100-500 һум күләмендә штраф һалына. Хәл йылдан-йыл ҡатмарлана бара. 2022 йылда илдә үҫмерҙәр транспорт саралары менән идара иткән 29 мең осраҡ асыҡланһа, 2023 йылда - 33 мең, 2024 йылда иһә 44 меңдән ашыу. Тенденцияны үҙгәртеү өсөн штрафтарҙы 5000 - 10 000 мең һумға тиклем арттырырға тәҡдим ителә. Бигерәк тә эскән водитель үҫмерҙәр ҙур хәүеф тыуҙыра. Иҫерек килеш рулгә ултырған өсөн дә закон проекты 15 000 - 20 000 мең һум штрафты күҙ уңында тота.

Әйткәндәй, Рәсәй Президенты Владимир Путин Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодексҡа ҡағылышлы федераль законға үҙгәрештәр индерҙе. Ул үҙ бурыстарын тейешенсә үтәмәгән ата-әсәләргә штраф һалыуҙы күҙ уңында тота. Штрафтар бер нисә тапҡырға арттырылды. Әгәр элек штраф 100-500 һум булһа, хәҙер иһә 500 һумдан 2 мең һумға еткерелде. Тейешле документ Рәсәй Федерацияһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.

# КҮП БАЛАЛЫЛАРҒА...

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары республиканың күп балалы ғаиләләренә дәүләт ярҙамы тураһында законына төҙәтмәләр индерҙе.**

Парламент рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, ишле ғаиләләргә республика техникумдарында һәм колледждарында балаларын көндөҙгө бүлектә уҡытыу хаҡының яртыһы кире ҡайтарыла. Уҡыу йылында бер бала өсөн ғаилә 30 мең һумға тиклем аҡса алырға мөмкин. Әммә быға тиклем закон юғары уҡыу йорттары ҡарамағындағы колледждарҙа түләп уҡыған студенттарға ҡағылмай ине. "Беҙ ошо етешһеҙлекте бөтөрҙөк. Хәҙер ошо категорияға ҡараған студенттар ҙа компенсацияға дәғүә итә ала. Республикала бөтәһе ошондай 620 студент иҫәпләнә. Бынан тыш, улар уҙған 2024/25 уҡыу йылы өсөн дә компенсация алырға хоҡуҡлы", - тине Константин Толкачев.

Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, компенсация өс бәлиғ булмаған бала тәрбиәләгән ғаиләләргә генә түгел, ә 23 йәшкәсә студент балалары булғандарға ла ҡағыла. Никахта торған йәки тулыһынса дәүләт тәьминәтендә булған балалар ғына был хоҡуҡтан файҙалана алмай.

12+

✓ *Бөгөн урман фонды биләмәһенең 94 проценты даими күҙәтеү аҫтында. Башҡортостандың урман инспекторҙары эшмәкәрлеген матди-техник йәһәттән хәстәрләү ҙә законһыҙ ағас ҡырҡыу күләмен кәметеүгә йоғонто яһай.*



ҠЫҪҠАСА

# УРМАН ҠЫРҠАЛАР...

**Башҡортостанда урманды законһыҙ ҡырҡыу буйынса көрәш дауам итә: үткән йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, быйыл ул 17 процентҡа кәмегән, тип хәбәр итә республиканың Урман хужалығы министрлығы.** 2025 йыл башынан "ҡара урман киҫеүселәр" законһыҙ рәүештә 1740 кубометр самаһы ағас әҙерләгән, 78 осраҡ буйынса енәйәт эше ҡуҙғатылған. Башҡортостандың урман хужалығы министры урынбаҫары Юнир Садиҡов законһыҙ рәүештә урман ҡырҡыу күләме кәмеүен тармаҡты һаҡлауға йүнәлтелгән саралар комплексына бәйләй. "Дистанцияла космос мониторингы - "ҡара урман ҡырҡыусылар" менән көрәштә һөҙөмтәле ҡорал. Мониторинг зонаһын планлы рәүештә киңәйтәбеҙ. Бөгөн урман фонды биләмәһенең 94 проценты даими күҙәтеү аҫтында. Хәтерегеҙгә төшөрәм, был эш 2018 йылда 360 гектар ерҙән башланғайны. Башҡортостандың урман инспекторҙары эшмәкәрлеген матди-техник йәһәттән хәстәрләү ҙә законһыҙ ағас ҡырҡыу күләмен кәметеүгә йоғонто яһай. 2019 йылдан ошо маҡсатҡа 157 миллион һум тирәһе аҡса бүленде. Был иһә 500-ҙән ашыу берәмек техника һәм ҡорамал алырға булышлыҡ итте", - тине министр урынбаҫары.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡушыуына ярашлы, республика Хөкүмәте тарафынан Башҡортостанда 2030 йылға тиклем граждандар оборонаһы һаҡлағыс ҡоролмаларын әҙерлек һыҙығына килтереү планы эшләнгән.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров министрлыҡтар, ведомстволар етәкселәре һәм сәнәғәт предприятиелары вәкилдәре ҡатнашлығында үткән төбәк оператив штабы ултырышында саралар үтәлеше барышы тураһында фекер алышты. "Хәҙерге ысынбарлыҡта бөтә һаҡлағыс ҡоролмаларҙың файҙаланырлыҡ хәлдә булырға тейешлеген аңлатып тороу кәрәкмәйҙер, тип уйлайым. Был мәсьәләгә беҙҙең Юғары Баш командующий иғтибар йүнәлтте, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Бының өсөн яуаплы кешеләрҙең ярашлы сараларҙы ҡабул итергә ваҡыт запасы етерлек булды, тип иҫәпләйем. Һыҙыҡ өҫтөнә алам, был эш предприятие, муниципалитеттар, Ғәҙәттән тыш хәлдәр органдары етәкселәре һәм тәртип һаҡлау көстәре менән урындарҙа бергәләп эшләүҙе талап итә".

✓ **Рәсәйҙең һауа-десант ғәскәрҙәре ойоштороулоуға 95 йыл тулыу уңайынан 2 августа Шишмә районының "Патриот" паркы биләмәһендә уҙған тантаналарҙа 7 меңдән ашыу кеше ҡатнашты.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Максим Серафимов исемендәге хәрби-патриотик парк өсөнсө тапҡыр десантсыларҙың төп байрамы майҙансығына әүерелде. Сара ҡунаҡтары экстремаль "Геройҙар уҙышы"нда ҡатнашты, әҙерлекмән отрядтары күргәҙмәләрен ҡараны, парашют селтәрҙәре һәм беләҙектәр үреү, авиамоделдәр эшләү, беренсе ярҙам күрһәтеү буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә булды. Махсус операцияла ҡатнашыусыларға айырыуса ҙур иғтибар бүленде, улар өсөн "Ватанды һаҡлаусылар" фондының республика бүлексәһе һәм МХО ветерандары ассоциацияһының консультация өҫтәлдәре эшләне. "Тәрлә йылдарҙа беҙҙән 100 меңгә яҡын кеше һауа-десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итте. Был илдең терәге, һуғышҡа һәләтле ғәскәрҙәрҙең берәһе. Миненсә, байрам яҡшы үтте, десантсылар балалары, ғаиләләре менән килә. Сараны киләһе йылда ла үткәреү тураһында уйларға кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ТОТОШ ИЛДӘ БАҺАЛЫЛАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Совет майҙанында Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө юридик институтының эске эштәр органдары өсөн белгестәр әҙерләп сығарыуға арналған тантаналы сарала ҡатнашты һәм юғары уҡыу йорто тыңлаусыларын, уҡытыусыларын һәм ветерандарын 51-се сығарылыш менән ҡотланы.**

- Һеҙҙең институт бөгөн компетентлы хоуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәрен әҙерләүҙең бай традицияларын лайыҡлы дауам итә. Институтты тамамлаусыларҙың һөнәри оҫталығы тотош илдә юғары баһалана. Ошо йылдарҙа юғары уҡыу йортонда 25 меңдән ашыу белгес әҙерләнгән, улар йәмәғәт тәртибен тәьмин итеү, енәйәтселеккә ҡаршы көрәш буйынса енел булмаған эште намыҫлы башҡара. Быйыл уҡыу йортон 170 йәш офицер тамамланы. Уларҙың 117-һе республикабыҙҙа ҡала, 53-ө Рәсәйҙең 11 төбәгенә эшкә йүнәлтелә.

Әлеге ваҡытта институт тәрбиләнеүселәренең күбеһе Махсус хәрби операцияла ҡатнаша, улар, ҡулдарына ҡорал тотоп, Тыуған илебеҙҙе һаҡлай. Беҙ уларҙың һәр береһе менән ғорурланабыҙ һәм еңеү менән ҡайтыуҙарын көтәбеҙ!

Хөрмәтле институт тамамлаусылар! Һеҙҙең алда законды һәм хоҡуҡ тәртибен ышаныслы һаҡлауҙы тәьмин итеү бурысы тора. Һөнәри бурысығыҙҙы намыҫ менән үтәрһегеҙ, тип ышанам. Аҡ юл һеҙгә, иптәш офицерҙар! Илебеҙ мәнфәғәте өсөн хеҙмәтегеҙҙә уңыштар, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө юридик институтының уҡыу бүлеге начальнигы Елена Кулешҡа Башҡортостандың Маҡтау грамотаһын, шулай уҡ уҡыу йортон тик яҡшы билдәләренә тамамлаған ете белгескә вуздды тамамлау тураһында дипломдар тапшырҙы.

# ӨФӨ-СИЛӘБЕ...

**1 августа Дим станцияһынан Өфө - Силәбе төбәк-ара маршруты буйынса "Карлуғас" электр поезы юлға сыҡты. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Куйбышев тимер юлы начальнигы Вячеслав Дмитриев ҡатнашты.**



- Бөгөн беҙҙә ҡыуанысла ваҡиға. Был Куйбышев тимер юлы менән бергә башҡарылған эш. Беҙ ҡала яңы юлдарында тимер юл составын 50 процентҡа тиерлек алмаштырҙыҡ. Ысынында бик ҡыҙыҡлы маршрут. Силәбегә алыҫ араға йөрөгән поездар менән дә барырға мөмкин, әммә яңы маршрут уңайлы, ташламаларҙы, студенттар өсөн мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алғанда, арзанға төшә. Беҙ Силәбе менән Башҡортостан араһын тағы ла яҡынайтабыҙ. Артабан Һамар, Магнитогорск ҡалаларына ошондай маршрут асырға тигән пландар бар, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Куйбышев тимер юлы начальнигы Вячеслав Дмитриев та республика халҡын һәм тимер юлсыларҙы ошо мөһим ваҡиға менән ҡотланы. Ул республика менән Рәсәй тимер юлдары араһында тығыҙ хеҙмәттәшлек өсөн Башҡортостан Башлығына рәхмәт әйтте. Уның билдәләүенсә, "Карлуғас" менән юлға 9 сәғәттән азыраҡ ваҡыт китә. Силәбегә ул төнгө 12-се 5 минутҡа барып етә. Дим - Силәбе маршруты буйынса юл хаҡы - 1 751 һум. 1 сентябрҙән 15 июнгә тиклем студенттарға юл хаҡы 50 процент ташлама менән 875 һум 50 тин була.

# СТАРТ БИРЕЛДЕ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан дәүләт аграр университетының Елək яланындағы Уҡыу-фәнни үҙәгендә үткән республика "Баҫыу көнө-2025" ғилми-ғәмәли семинарында ҡатнашты.**



Төбәк етәксеһе уңыш йыйыу кампанияһына старт бирҙе һәм аграр сәнәғәт комплексы хеҙмәтсәндәренә Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы.

- Республика хөрмәтле аграрийҙарыбыҙға терәк булды, буласаҡ та, шул иҫәптән ауыл хужалығын индустриаллаштереү йәһәтенән дә. Был көндәрҙә 4 190 комбайн баҫыуға сыҡты, был үткән йыл менән сағыштырғанда 80-гә күберәк. Быйыл насар булмаған уңыш көтәбеҙ. Муниципалитеттарға, фермер хужалыҡтары башлыҡтарына, ауыл хужалығы предприятиелары етәкселәренә яңы техниканы әүҙем һатып алғанлығыҙ өсөн рәхмәт. Үҙебеҙҙең яҡтан ауыл хужалығы машиналарын һәм ҡорамалдарҙы, шул иҫәптән ватанда етештерелгәнен дә һатып алыу сығымдарын компенсациялау бурысын атҡарасаҡбыҙ, - тине Радий Хәбиров һәм шулай тип дауам итте:

- Башҡортостан дәүләт аграр университетының Өфө районындағы Уҡыу-фәнни үҙәгендә Баҫыу көнө даими үткәреләсәк. Ул заманса тармаҡ ҡаҙаныштары менән танышырлыҡ төп майҙанға әүереләсәк, тип килештек. Бында ер эшкәртеүҙең инновациялы ысулдарын һәм заманса ауыл хужалығы техникаһын күреп, селекция эше һөҙөмтәләре менән танышып буласаҡ. Был барыһына ла файҙалы булыр, тип ышанам, - тине Радий Хәбиров. - Университет ректоры Илдар Исмәғил улы Ғәбитовҡа рәхмәт. Быйыл вуз "Приоритет- 2030" стратегик академик лидерлыҡ программаһына инде. Был - артабанғы үҫеш өсөн яҡшы стимул.

Төбәк етәксеһе уңыш кампанияһы һөҙөмтәләре буйынса республикала иң яҡшы механизаторҙарҙы асыҡлаясаҡтары тураһында әйтте һәм аграрийҙарға уңыш теләне. Артабан Радий Хәбиров Өфө районының "Рассвет" ауыл хужалығы механизаторы Александр Порхун менән "Ростсельмаш" иген йыйыу комбайнында баҫыуҙың старт участкаһы буйлап үтте.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Был аҙнала Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе кадрҙар мәсьәләләренән башланды. Башҡортостан Башлығы Мишкә районының яңы етәксеһе Лариса Александрова менән таныштырҙы. Радий Фәрит улы шулай уҡ Зөһрә Гордиенконы эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһынан бушатыу тураһында указға ҡул ҡуйыуы тураһында белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, чиновник икенсе эшкә күсә. Туризм министры итеп быға тиклем иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры урынбаҫары булған Светлана Верещагина тәғәйенләнә.

✓Благовещенда "Zarяд" физкультура-һауыҡтырыу комплексын асыу тантанаһы үтте. Яңы физкультура-һауыҡтырыу комплексы Башҡортостан менән "Роснефть" араһында хеҙмәттәшлек сиктәрендә "Башнефть" компанияһының финанс ярҙамы менән төҙөлдө. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, "Башнефть" йәмғиәтенең генераль директоры Владимир Чернов һәм башҡалар ҡатнашты. "Благовещенда 35 мең кеше йәшәһә лә, бында ҙур физкультура-һауыҡтырыу комплексы юҡ ине. Мин иң тәүҙә үҙебеҙҙең "Башнефть" компанияһына рәхмәт белдерәм, сөнки тап "Башнефть" ҡалаға, республикабыҙға ошондай шәп бүләк яһаны", - тине Радий Хәбиров.

✓Ленинград өлкәһендә ер һөрөү буйынса XII Рәсәй асыҡ чемпионаты старт алды. Былтырғы кеүек үк, быйыл да Башҡортостан исеменән Мәләүездән Илдар Ишәкәев һәм Валерий Романов ҡатнаша. Улар илдең иң яҡшы 50 механизаторы менән ярыша. Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Трактор-шоу" 8-10 августа була. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Илдар Ишәкәев 2022 йылда вице-чемпион исемен яуланы, 2016 йылда Рәсәй йыйылма командаһы составында ер һөрөү буйынса Европа чемпионатында ҡатнашты.

✓Өфө дәүләт нефть техник унивреситетына эшлекле һәм белем алыу сәфәре менән Ираҡ нефть министрлығы белгестәре килде. Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, сәфәрҙе Ираҡтың Васит провинцияһындағы Бадра яткылығы операторы ойоштороған. Төп маҡсат - нефть һәм газ тармағындағы алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу. Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Булычева: "Башҡортостан Ираҡтағы хеҙмәттәштәренә белем биреүҙе генә түгел, ә машина эшләү һәм инжиниринг продукцияһын да тәҡдим итә ала", - тине.

✓Республика уҡсылары Ҡырғыҙстанда үткән халыҡ-ара турнирында уңышлы сығыш яһаны. Башҡортостан уҡсылары 3 миҙал яуланы. 25 июлдән 29 июлгә тиклем Ҡырғыҙстанда уҡ атыу буйынса "Илбирс-4" халыҡ-ара турнир үтте. Ярышта Рәсәйҙән, Ҡырғыҙстандан һәм Ҡаҙағстандан 69 спортсы ҡатнашты. 3Д дисциплинаһында Хөрмәт Таһиров көмөш миҙал алды. Батырхан Ғайсин "бронза" яуланы. Шулай уҡ 50 метрлыҡ араүыҡта (ҡырғыҙ сәбендә) Батырхан Ғайсин көмөш призер булды.

✓ **2025 йылдың 1 сентябренән көндөҙгө уҡыу формаһындағы студенттар өсөн йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие стипендияға түгел, ә төбәктең йәшәү минимумына ҡарап иҫәпләнәсәк һәм 90 мең һум самаһы тәшкил итәсәк.**



# ӘСӘЛЕККӘ ЯРҘАМ

**Рәсәй Хөкүмәтендә ғаилә һәм демографик сәйәсәтте тормошҡа ашырыу һәм күп балалылыҡҡа ярҙам итеү буйынса яңы эш стратегияһы ҡабул ителде. Әсәлеккә ярҙам итеү буйынса планлаштырылған саралар тураһында социаль мәсьәләләр буйынса кәңәшмәлә Владимир Путинға вице-премьер Татьяна Голикова хәбәр итте.**

Әле эксперттар берләшмәһе, граждандар, төбәктәр менән берлектә был стратегияны тормошҡа ашырыу буйынса эш планы әҙерләнә. Президент ҡушыуы буйынса 2025 йылдан ғаилә һәм демографик сәйәсәтте тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән дүрт яңы милли проект старт алды: финанслау күләме 18 триллион һумға яҡын булған "Ғаилә", "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" - 2,1 триллион һум, "Кадрҙар" - 114 миллиард һум, "Һаулыҡты һаҡлауҙың яңы технологиялары" - 38 миллиард һум.

Татьяна Голикова хәбәр итеүенсә, Хөкүмәт йәш әсәйҙәргә, шулай уҡ күп балалы әсәләргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән бер-нисә сара күрә. Атап әйткәндә, 2025 йылдың 1 сентябренән көндөҙгө уҡыу формаһындағы студенттар өсөн йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие стипендияға түгел, ә төбәктең йәшәү минимумына ҡарап иҫәпләнәсәк һәм 90 мең һум самаһы тәшкил итәсәк.

Хөкүмәт күп балалы әсәләрҙең пенсия стажы тураһындағы закон проекттарын хупланы: хәҙер стажға һәр баланы сикләүһеҙ ҡарау ваҡыты иҫәпләнә. Герой әсәләр льготалар буйынса Хеҙмәт Геройҙарына тиңләштерелә: айлыҡ түләү 72 мең һум йәки натураль льготалар тәшкил итәсәк, ә пенсияға 32 мең һум өҫтәләсәк. 2026 йылдың 1 ғинуарынан 4,2 миллион ғаиләнән 10 миллион балаға ҡағылған ғаилә һалымы түләнә башлай. 2025 йылдан "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә тыуым түбән булған 41 төбәктә демографик ярҙамға 5 йылға 75 миллиард һум бүленгән. Бынан алда Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан буйынса бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре ғаиләгә иң кәрәкле ярҙам саралары хаҡында һөйләне.

# ЗАКОНДЫ КҮҘӘТҺЕНДӘР ҺУҢ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төбәктә хоҡуҡ тәртибен тәьмин итеү буйынса даими эшләүсе координацион кәңәшмә ултырышын үткәрҙе. Унда хоҡуҡ һаҡлау һәм контроль-күҙәтеү органдары, профилле министрлыҡтар етәкселәре, шулай уҡ төҙөлөш компаниялары вәкилдәре ҡатнашты.**

Көн тәртибенә республикала миграция закондарын күҙәтеү буйынса өҫтәмә саралар тураһындағы мәсьәлә ҡуйылды. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар дуҫ илдәрҙән килгән граждандарҙы хеҙмәткә урынлаштырыу, этник берләшмәләр араһында аңлатыу эшен алып барыу мәсьәләләре тураһында фекер алышты.

Башҡортостан Башлығы республиканың миграция сәйәсәте концепцияһының төп йүнәлештәрен билдәләне - йәмғиәттең һәм граждандарҙың именлеге, Рәсәй мәҙәнилеге оҡшашлығын, милләт-ара һәм дин-ара тыныслыҡты һәм килешеүҙе һаҡлау. "Беҙҙең иҡтисадыбыҙ әүҙем үҫешеү шарттарында башҡа илдәрҙән хеҙмәт ресурстары кәрәк, - тине Радий Хәбиров. - Шуның менән бергә мигранттарҙы яраҡлаштырыу буйынса системалы эш мөһим, улар беҙҙең закондарҙы үтәргә, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һәм традицияларыбыҙҙы хөрмәт итергә тейеш".

Әйткәндәй, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары мигранттарҙы гражданлыҡтан мәхрүм итеү тураһында закон проектын ҡараясаҡ. Проектта был ғәмәлде атҡарыу өсөн нигеҙҙәр исемлеген киңәйтеү мәсьәләһе тикшереләсәк. Исемлектә енси характерҙағы көс ҡулланыу (РФ Енәйәт кодексының 132-се статьяһының 3-5-се өлөштәре), террористик эшмәкәрлек алып барыуға, терроризмды аҡлауға йәки пропагандалауға асыҡ саҡырыуҙар (РФ Енәйәт кодексының 205.2 статьяһының 1-се өлөшө), сит ил дәүләте, илебеҙ именлегенә ҡаршы халыҡ-ара йәки сит ил ойошмаһы менән конфиденциаль нигеҙҙә хеҙмәттәшлек (РФ Енәйәт кодексының 275.1-се статьяһы), Рәсәй Федерацияһы ҡатнашмаған халыҡ-ара ойошмаларҙың йәки сит ил дәүләт органдарының (РФ Енәйәт кодексының 284.3-сө статьяһы) ҡарарҙарын үтәүгә булышлыҡ итеү, Рәсәй именлегенә ҡаршы йүнәлтелгән эшмәкәрлектә дошманға ярҙам күрһәтеү (РФ Енәйәт кодексының 276.1-се статьяһы), нацистик атрибутиканы йәки символиканы пропагандалау (РФ Енәйәт кодексының 282.4-се статьяһы), дәүләт именлегенә ҡаршы йүнәлтелгән эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыуға асыҡ саҡырыуҙар (РФ Енәйәт кодексының 280.4-се статьяһы), Рәсәй Федерацияһының тәнҡит мәғлүмәт инфраструктураһына законһыҙ йоғонто яһау (РФ Енәйәт кодексының кодексының 274.1 статьяһының 4-5-се өлөштәре) кеүек пункттар бар.

# УЛАРҘЫҢ ЯЛЫ ЛА МӨҺИМ

**"Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһының иң популяр йүнәлеше билдәле булды**

2020 йылда Радий Хәбиров тәҡдиме менән башланған "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" республика программаһы бөгөн 7 йүнәлештә эшләй. Улар араһында тукланыу мәктәптәре, "көмөш йәштәге сәғәттәр", халыҡ кәсептәренә өйрәтеү, сәләмәт йәшәү рәүеше, ирекмәнлек һәм остазлыҡ бар. Был хаҡта Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова "Честно говоря" программаһына биргән интервьюһында һөйләне. Туризм программаның иң популяр тармағы булып тора, уға республика буйлап экскурсиялар, шулай уҡ Беларусь һәм Үзбәкстанға сәйәхәттәр инә. "Дорогие мои старики" ойошмаһы директоры Ольга Ремаренко һүҙҙәренсә, әгәр элек төбәктең коммерцияға ҡарамаған ойошмалары эшмәкәрлеге оло йәштәгеләрҙе ҡотҡарыуға йүнәлтелгән булһа, хәҙер, йәшәү кимәле һәм сифаты артҡан һайын, ойошмалар күберәк уларҙың ялы менән шөғөлләнә. "Беҙ улар өсөн концерт программалары ойошторабыҙ, йорт-интернаттарға барабыҙ, оҫталыҡ дәрестәре үткәрәбеҙ, финанс һәм компьютер грамоталылығына өйрәтәбеҙ", - тине тура эфир ҡунағы.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, биш йыл эсендә "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһының төрлө сараларында 1 миллиондан ашыу кеше ҡатнашты, уларҙың 470 меңдән ашыуы 2024 йылға тура килде. Ҡалтасы, Краснокама, Мишкә райондары, Нефтекама һәм Сибай халҡы әүҙемлек күрһәтте.

**"Башинформ" материалдары файҙаланылды.**

## ҠЫҪҠАСА

# БАЙРАМ ХАҠЫ ҠҮПМЕ?

**Рәсәйҙә мәктәп өсөн минималь тауарҙарҙың хаҡы билдәле булды.** Июнь-июль айҙарында минималь йыйылманың хаҡы (мәктәп формаһы, рюкзак, күлдәк, салбар, туфли, кроссовка, футболка, көндәлек, дәфтәрҙәр комплекты, канцелярия, пенал) бер йылда 7 процентҡа (16,2 мең һумға тиклем) артҡан. Һатыуҙарҙың 60 проценттан ашыуы маркетплейстарға тура килгән. Күпселек ата-әсәләр мәктәпкә тауарҙарҙы алдан уҡ һатып алмай. Һәр ваҡыттағыса, әҙерлек август айында һәм сентябргә яҡыныраҡ башлана. Әммә дөйөм статистика күрһәтеүенсә, ата-әсәләр мәктәпкә әҙерләнгәндә экономияламай, тип билдәләй эксперттар. Рюкзактар - 4078 һум; мәктәп формаһы (бүленмәй) - 3135 һум; канцелярия предметтары менән пенал - 1164 һум; ҡәләмдәр/ҡәләмдәр йыйылмаһы - 429 һум; дәфтәрҙәр йыйылмаһы - 459 һум. Кейемдәрҙән: блузка/күлдәктең уртаса хаҡы 1078 һум; салбар/итәк - 949 һум; кроссовкалар - 2067 һум; туфли/ботинкалар- 2089 һум; футболка - 621 һум.

✓ **Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова 2025 йылда X бөтә Рәсәй бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи ауылдарҙа уңайлы ҡала мөхитен булдырыу буйынса иң яҡшы проекттар конкурсы тураһында һөйләне.** Быйыл унда Башҡортостандан Октябрьский, Туймазы, Бөрө, Яңауыл, Ағиҙел һәм Дүртөйлө ҡалаларынан, шулай уҡ Үрге Йәркәй, Ҡырғыҙ-Миәкә, Кушнаренко һәм Шишмә ауылдарынан 10 ғариза ебәрелгән. Конкурс ойошторолғандан алып Башҡортостандан йәмғеһе 34 проект еңеүсе булды, шуларҙың 27-һе тамамланған да инде. "Конкурс проекттарын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә республикала төҙөкләндерелгән йәмәғәт киңлектәре барлыҡҡа килә, был, үҙ сиратында, ҡала мөхитенең сифатын яҡшыртыуға йоғонто яһай һәм беҙгә ҡалаларыбыҙҙы һәм ауылдарыбыҙҙы яҡшыртырға мөмкинлек бирә", - тине Ирина Голованова. Билдәле булыуынса, Бәләбәй - өс тапҡыр, ә Ағиҙел, Баймаҡ, Бөрө, Благовещен, Дүртөйлө, Ишембай, Мәләүез, Учалы, Яңауыл икешәр тапҡыр еңеүсе булды. Республиканың 17 ҡалаһында бөтәһе 24 урын яңыртылды һәм Николо-Березовка, Воскресенское һәм Йылайыр ауылдарында өс проект тормошҡа ашырылды.

✓ **Дәүләт Думаһы тейешле закон ҡабул итте. Уға ярашлы, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары һәм үҙмәшғүлдәр кредит каникулдары алырға хоҡуҡлы**. Закон 1 октябрҙә көсөнә инә. Рәсәй Банкында белдереүҙәренсә, каникулды ярты йылға, биш йылға бер тапҡыр, һәр кредитҡа алырға мөмкин. Эшҡыуарҙың йәки компанияның килеме кәмегәнме-юҡмы икәне мөһим түгел. Әммә лимиттар бар. Кредит күләме түбәндәге сумманан артмаһа, каникулдар бирелә: микропредприятиелар өсөн - 60 миллион һум; бәләкәй предприятиелар өсөн - 400 миллион һум; урта предприятиелар өсөн - 1 миллиард һум; үҙмәшғүлдәр өсөн - 10 миллион һум. Льготалы осорҙа процент иҫәпләнә һәм ай һайын капитализациялана, йәғни кредит суммаһына өҫтәлеп бара. Каникулдарҙы 2024 йылдың 1 мартынан һуңыраҡ төҙөлгән килешеүҙәр буйынса рәсмиләштерергә рөхсәт ителә. Башҡортостандың Милли банкы мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың ғинуар-апрелендә бизнес 191,5 миллиард һум алған, күләмдең 2/3 өлөшө тиерлек эре компанияларға тура килә. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ иһә бурысҡа алыуҙы кәметә - кредитты хеҙмәтләндереү бик ҡиммәткә төшә.

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Саҡмағош һәм Салауат райондарындағы биш ауылға юғары тиҙлекле интернет барып етте. Саҡмағош районы хакимиәте башлығы Реканс Ямалиев билдәләүенсә, Яңы Ҡото һәм Тайнаш ауылдарына юғары тиҙлекле 4G селтәре килде, хәҙер халыҡ туғандары һәм яҡындары менән һәр саҡ бәйләнештә, дәүләт хеҙмәттәре, дистанцион уҡыу һәм интернеттың башҡа мөмкинлектәре менән файҙалана ала. Салауат районында ла яңы база станциялары урынлаштырылды. Район хакимиәте башлығы Марс Кашапов хәбәр итеүенсә, Иҙрис, Мөсәт һәм Лағыр ауылдарына ла юғары тиҙлекле мобиль интернет барып етте.

✓ Быйыл "Урал аръяғы-2025" инвестиция һабантуйы 4, 5 сентябрҙә Сибай ҡалаһында үтәсәк. Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйы йола буйынса дәүләт власы органдары һәм эшҡыуарлыҡ даирәһе вәкилдәрен, эксперттарҙы һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәрен, Рәсәй һәм сит ил инвесторҙарын берләштерә. Сараның төп темаһы - төп күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн юл карталарын төҙөүҙә төбәк тәжрибәһе. Шулай уҡ инвестиция мөхитен яҡшыртыу буйынса Башҡортостандың тағы бер уңышлы практикаһы - бизнес-шәрифтәр институты тәжрибәһе.

✓ Ауыр атлетика буйынса Нефтекама спортсыһы Айһылыу Ниғмәтйәнова Европа чемпионы исеменә лайыҡ булды. Ярыштар Испанияның баш ҡалаһы Мадридта үтте. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Айһылыу Ниғмәтйәнова алтын һәм көмөш миҙалдар яуланы. Икебәйге финалында яҡташыбыҙ икенсе көмөш миҙалын алды. Айһылыу Нефтекаманың спорт мәктәбендә тренеры Илзирә Усманова етәкселегендә шөғөлләнә. Бынан алдараҡ яҡташыбыҙ дүрт милли рекорд ҡуйҙы һәм Рәсәй беренселегендә еңеү яуланы.

✓ Өфөлә армрестлинг буйынса "Урал алышы. Көслөләр ярышы" уҙҙы. Ярышта Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән билдәле спортсылар ҡатнашты. Сибайҙан МХО ветераны Сергей Ипатов турнирҙа уңышлы сығыш яһап, 3-сө урынды алды. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы Сергей Озерцов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. Армрестлинг буйынса Бөтә Рәсәй турниры "Көслө кешеләр" төбәк проектының дауамы булып тора, уның маҡсаты - спорт ярҙамында хәрби хәрәкәттәр ветерандарын яраҡлаштырыу. Сараға абруйлы ҡунаҡ - армрестлинг буйынса 8 тапҡыр донъя чемпионы Виталий Лалетин килгәйне.

✓ Башҡортостандан ағалы-ҡустылы бер туған МХО биләмәһенән 94 йәшлек әсәһен күрергә ҡайтҡан. Был хаҡта Благовар районы хакимиәте башлығы Марат Йосопов хәбәр итте. Благовар районынан "Грат" һәм "Грот" позывнойлы яугирҙар әсәләре Нәзирә Ғәҙелшинаға 94 йәш тулған көндө ҡайтып төшкән. Ағаһы фронтҡа китергә булғас, ҡустыһы ла, һис икеләнеп тормайынса, шундай ҡарар ҡабул итте, тип өҫтәне Марат Йосопов.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## БИРҘИН ҒӘЛИ ИРКӘБАЙ УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, уҡсылар батальоны командирының сәйәси эштәр буйынса урынбаҫары. Гвардия капитаны, Советтар Союзы Геройы. 1907 йылдың 5 мартында Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Байғужа ауылында (хәҙерге Ишембай районы) тыуған. Урта белемле. 1925 йылға тиклем хужалыҡ эштәрендә ата-әсәһенә ярҙамлаша. 1925 - 1928 йылдарҙа Стәрлетамаҡ кантоны Аҙнай олоҫоноң комсомол комитеты секретары була. 1928 - 1930 йылдарҙа - Стәрлетамаҡ кантоны Кәлсер-табын олоҫоноң башҡарма комитеты рәйесе, 1930 - 1933 йылдарҙа - ВКП(б)-ның Маҡар райкомында ойоштороу бүлеге мөдире,1933 йылдың майынан алып 1941 йылдың сентябренә тиклем - БАССР-ҙың Маҡар, Ҡырмыҫҡалы МТС-тары директоры.

1941 йылдың сентябренән Башҡорт АССР-ының Ҡырмыҫҡалы райвоенкоматы тарафынан Ҡыҙыл Армия сафтарына саҡырыла. Калинин, Сталинград, Воронеж, Ялан фронттарында хеҙмәт итә, яраланғандан һуң яңынан фронтҡа китә. Ул Ялан фронтында 37-се удар армияның 92-се гвардия уҡсылар дивизияһы 280-се уҡсылар полкының батальон политругы вазифаһын башҡара.

Ғ. И. Бирҙинды наградлау ҡағыҙында ошондай мәғлүмәт бирелгән: "Бирҙин иптәш 1943 йылдың 1-2 октябрендәге алыштарҙа партия сәйәсәте эшен оҫта ойошторҙо, һөжүм итеүҙең юғары ынтылышлылығын тәьмин итте. Батальон командиры сафтан сыҡҡан саҡта командованиены үҙ өҫтөнә алды һәм, Днепрҙың уң ярына уңышлы сығып, башҡа подразделениеларҙың йылға аша сығыуын тәьмин итте. Алыштар һөҙөмтәһендә дошман танкыларының һәм пехотаһының 8 контратакаһын кире ҡаҡты, 2 танкыны, 8 бронемашинаны шартлатты, 2 дошманды әсирлеккә алды һәм 180-гә тиклем һалдат һәм офицерҙы юҡ итте. Шәхсән үҙе станковый пулеметтан 28 немец һалдатын һәм офицерын юҡ итте".

Геройҙың яҡташы, билдәле шағир Риф Мифтахов уның тураһында шулай тип яҙҙы: "1945 йылдың бер көнөндә М.И. Калининдан: "Чкалов ҡалаһына Ленин ордены һәм Советтар Союзы Геройының Алтын йондоҙон алырға юлға сығығыҙ"- тигән телеграмма килә. Награданы уға Көньяҡ Урал округы командующийы генерал Захаров тапшыра. Уның бүлмәһенә ингәс, Геройға хөрмәт йөҙөнән генерал-офицерҙар составы аяғөҫтө баҫып, ҡул сабып ҡаршылай. Бына шундай характерлы, егет булараҡ та тиҙ өлгөргән, ҡыйынлыҡтарҙан ҡурҡмаған тәүәккәл, көслө рухлы ине минең яҡташым..."

Яраланғандан һуң, 1944 йылдың мартында, тыуған ауылына ҡайта. Ул ғүмеренең һуңғы көнөнәсә Ишембай районының ҙур һәм бәләкәй ауылдарҙы берләштергән Байғужа ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе була. Бер нисә тапҡыр РСФСР Юғары Советы депутаты итеп һайлана. 1973 йылдың 25 октябрендә вафат була, Байғужа ауылында ерләнгән.. Награлары: "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин ордены, "Ҡыҙыл Йондоҙ" ордены, боевой миҙалдар. Ғ.И. Бирҙинға Ишембай ҡалаһының Батырҙар аллеяһында бюст ҡуйылған. Өфө ҡалаһының Еңеү Паркындағы мәрмәр таҡтаташҡа Ғәли Берҙин исеме алтын хәрефтәр менән уйылып яҙылған.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ҮҘЕҢӘ ЫШАН!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Ғәшүрә ЛОҠМАНОВА, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты, тарих фәндәре кандидаты:*** Был һорауға яуап итеп ошондай һүҙҙәр әйткем килә. Һәр ваҡытта ла ауыр замандар булған, бөгөнгө көндә лә илебеҙ еңел булмаған осор кисерә. Ундай мәлдәр бер илдең дә тарихын урап үтмәй һәм ошондай ваҡытта иң мөһиме - кеше булып, айыҡ аҡылды һаҡлап ҡалыу һәм яҡшылыҡҡа ышанысты юғалтмау.

Уҡытыусы булараҡ, "белем" тигән ябай, әммә мөһим хаҡиҡәткә баҫым яһағым килә. Белем, уҡыу, нимәнелер белергә тырышыу, үҫеш һәр ваҡытта ла ҙур көс булды һәм артабан да шулай буласаҡ. Эйе, бәлки беҙ ҙур хәл-ваҡиғаларға йоғонто яһай алмайбыҙҙыр, әммә үҙебеҙҙе бөтә яҡлап та яҡшыртыуҙы, үҫеште контролдә тота алабыҙ.

Бер-беребеҙгә түҙемлерәк булайыҡ, тип әйткем килә. Ауыр ваҡыттарҙа айырыуса яҡындарыбыҙға, дуҫтарға ярҙам ҡулы һуҙыу, кеше бәләһе

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### Йәй көндәре нисек үтә: тәбиғәт ҡосағында, йылға, диңгеҙ буйҙарындамы, әллә баҡсала көсөргәнешле хеҙмәт, еләк-емеш йыйыу менәнме, әллә ейән-ейәнсәрҙәр менән мәж килеү өҫтөндәһегеҙме?

***Ғәйнулла РАХМАНҒОЛОВ, Мәләүез районы:*** Йәйге ял Хеҙмәт ғәле йәнәптәре менән ҡушарлап үтә. Аҙыраҡ аҡса эшләп алырға ла форсаты сығып ҡына тора. Үҙебеҙсә әйткәндә, "калым" күбәйә инде был осорҙа: кемгәлер гараж кәрәк, икенселәр иҙән һалыуымды һораны - ошо шөғөлдәрем үҙе минең өсөн ҙур ҡыуаныс. Һәр заказ, һәр проект үҙенсә ҡыҙыҡлы: кемдер үҙенә бәләкәй, бик ябай гараж теләй, икенсеһе иһә иркен, ҙур, йылытыулы, һаҡсыл бина тураһында хыяллана. Һәр клиенттың үҙ маҡсаты, үҙ теләге - мин уларҙың барыһын да тормошҡа ашырырға тырышам. Ҡайһылыр эште тиҙ арала, ҡайһыһын ентекләп, ләкин юғары сифат менән эшләйем.



Ғөмүмән, мин һәр эшемде яратып башҡарам, сөнки кешеләргә ысынлап та файҙа килтереүемде беләм. Һәр яңы проектты ҙур ихласлыҡ менән башҡарып, клиенттарҙың ышанысын ҡаҙанып йәшәйем. Һәр эшем - минең хеҙмәтем, тәжрибәм, күңел көсөм емеше. Ваҡыт үткән һайын, урамдар буйлап йөрөгәндә, үҙем эшләгән эштәрҙе күреп, күңелем йылына. Ҡайһы бер клиенттарым рәхмәт әйтеп, минең хаҡта дуҫтарына, күршеләренә һөйләй, тағы заказдар өҫтәлә. Был өлкәлә күп нәмәгә өйрәндем: матди яҡтан да, оҫталыҡ серҙәре яғынан да. Ләкин иң мөһиме - минең эшемдең кешеләргә кәрәкле булыуы, уларҙың ышанысын аҡлауы ғорурландыра.

Әлбиттә, ғаилә менән ял итергә лә тырышам. Ейән-ейәнсәрҙәрем менән туйғансы аралашыу, уларҙың шатлығын күреү, ваҡытты бергә үткәреү минең өсөн бик мөһим. Шул бәләкәстәрҙең күңелен күрер өсөн генә лә өҫтәмә эш алырға тура килә ҡайһы берҙә. Улар ҡыуанысын күреү - үҙе бер рухи байлыҡ, ниндәй генә эш хаҡынан да ҡиммәтерәк. Эш араһында Нөгөш һыуһаҡлағысына барып, теплоходта елдәй елкенеп, тулҡындарҙы кисеп, урман-тауҙар араһында йөрөп ҡайттыҡ. Йәнәш ултырған ейәнсәрҙәрҙең көлөшөүе кәйефте күтәреүе, һыу өҫтөндә яҡтыраҡ булып балҡыған ҡояш - быларҙың барыһы ла бәхетле мәлдәр, һөйөнөслө, йылы тәьҫораттар.

Ғаилә менән Торатауға ла күтәрелдек. Йыл да бер тапҡыр булһа ла изге тауға артылыу - үҙе ҡыуаныс. Бейеклектән киңлеккә һоҡланып, балалар менән бергә сәй эсеп, фотолар төшөрөп, өмөт, шатлыҡ, тыныслыҡ йыйып ҡайтаһың. Тап бына ошондай ваҡытында мин ял итәм. Яратҡан эшем һәм яратҡан ғаиләм менән үҙемде бәхетле тип һанайым. Янымда ейән-ейәнсәрҙәрем, ғаиләм булғанда күңелем тыныс. Ысын ял шулдыр, тип уйлайым.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Журналистар союзы ҡарамағындағы Советтың элекке рәйесе, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы филиалы директоры урынбаҫары Вилдан Ғәлин иҫтәлегенә волейбол турниры уҙғарыла. Был турала ҡарар Журналистар союзы идараһының сираттағы ултырышында ҡабул ителде.

✓Ғафури районынан фермер Ҡаҙағстанға 1400 тонна бойҙай һатҡан. Был хаҡта Россельхознадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итәләр. Продукция өлгөләре һынау лабораторияһында кәрәкле бөтә экспертизалар үткән. "Энтомологик, герболог һәм микологик экспертизалары һөҙөмтәләре буйынса хәүефле карантин организмдары һәм иген ҡоротҡостары асыҡланманы. Иген фитосанитар хәүефһеҙлек талаптарына тулыһынса тап килә", - тип белдерә күҙәтеү ведомствоһы белгестәре.

✓Йәнбирҙиндар ғаиләһенең "Башҡорт кәзәһе" крәҫтиән-фермер хужалығы Мәләүез районында урынлашҡан. Лиана һәм Эдуард Йәнбирҙиндар 100 баштан ашыу инглиз-нубий һәм заанен тоҡомло кәзә тота, улар беҙҙең климат шарттарына яраҡлашҡан. Бында эремсек, ҡаймаҡ, сыр, шул иҫәптән оҙаҡ һаҡланған үҙенсәлекле сырҙар етештерелә. 2025 йылдың мартында фермерҙар Cheese Expo 2025 халыҡ-ара сыр етештереүселәр күргәҙмәһендә ҡатнаша һәм кәзә һөтөнән ҡаты сыр өсөн алтын миҙалға лайыҡ була.

✓Рәсәйҙә дәүләт сервистары менән берләштерелгән мессенджер булдырыла. Ҡулланыусылар һанлы платформа ярҙамында ҡунаҡханаларға урынлашҡанда йәки магазиндарҙа йәште раҫлағанда шәхесен раҫлай, килешеүҙәр төҙөү өсөн көсәйтелгән цифрлы ҡултамғаны файҙалана ала. Рәсәй белгестәре әҙерләгән мессенджер Рәсәйҙең программа тәьминәте реестрына индерелә. Федерация Советында белдереүҙәренсә, сервис "сит ил мессенджерҙарына хәүефһеҙ һәм конкурентлыҡҡа һәләтле альтернатива" булмаҡсы.

✓2025 йылда Башҡортостан биләмәһендә төбәк һәм урындағы әһәмиәттәге 1037 километр автомобиль юлын тәртипкә килтереү, шулай уҡ дөйөм оҙонлоғо 1,7 саҡрым тәшкил иткән 24 күпер төҙөү һәм ремонтлау күҙаллана. Дөйөм алғанда, ошо эштәргә 44,1 миллиард һум, шул иҫәптән федераль бюджеттан 9,8 миллиард һум финанс сығымдар ҡаралған. Төбәк трассаларында дөйөм оҙонлоғо 682 километр, ә урындағы юлдарҙа 350 километрҙан ашыу участканы тәртипкә килтереү күҙаллана.

✓Мәләүез районындағы "Нөгөш" ҡунаҡханаһы йәйге миҙгелгә 32 модулле йорт төҙөгән. Уларҙың һәр береһендә икенән алтыға тиклем йоҡлау урыны бар. Эстә йәшәү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған: кондиционерҙар, аш-һыу блоктары, санузелдар, душ кабиналары эшләй. Шулай уҡ коммуникациялар тоташтырылған. Әле ҡунаҡхана биләмәһен төҙөкләндереү бара.

*✓ Гражданлыҡ позицияһының мөһимлегенә айырым иғтибар иткем килә. Йәмғәт тормошонда, төрлө проекттарҙа әүҙем ҡатнашыу, үҙ идеяларыбыҙҙы тәҡдим итеү - быларҙың барыһы ла беҙҙең гражданлыҡ позициябыҙҙы күрһәтә.*



янынан ситләтеп үтмәү кәрәк. Кешенең ысын байлығы аҡса менән түгел, ә уның изге эштәре һәм тирә-яҡҡа ҡарата булған ихлас мөнәсәбәттәре менән үлсәнә.

Оптимизмды юғалтмайыҡ. Әлегә тиклем таң атмайынса ҡалғаны юҡ, бөтә ауырлыҡтар ҙа үтә, барыһы ла яйлана, иң мөһиме - барған юлыңдан туҡтамайынса алға ынтылыу, үҙеңә һәм иленә ышаныу.

Мәҙәни мираҫыбыҙҙы һаҡлайыҡ. Нәҡ мәҙәни мираҫыбыҙ, милли рухыбыҙ беҙҙе уникаль итә, үҙ-үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға һәм киләсәк быуындарға рухи байлығыбыҙҙы тапшырырға ярҙам итә. Китаптар уҡыйыҡ, музейҙарға йөрөйөк, тарихыбыҙҙы өйрәнәйек, сөнки быларҙың барыһы ла рухыбыҙҙы нығыта һәм артабан хәрәкәт итергә көс-ҡеүәт бирә.

Белемле, ижади ҡарашлы, һәләтле йәштәрҙең булыуын күреп ҡыуанам. Һеҙ - беҙҙең киләсәк. Иртәгәһе көндөң, киләсәгебеҙҙең ниндәй булыуы һеҙҙән - тырышлығығыҙҙан, зыялы булыуығыҙҙан - тора. Һеҙҙең һәр уңышығыҙ, һәр ҡылған изге эшегеҙ - ул дөйөм яҡшылыҡҡа индергән ҙур өлөшөгөҙ. Тап йәштәр ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеүгә яңы ҡараштар һәм яңы алымдар индерә ала.

Гражданлыҡ позицияһының мөһимлегенә айырым иғтибар иткем килә. Йәмғәт тормошонда, төрлө проекттарҙа әүҙем ҡатнашыу, үҙ идеяларыбыҙҙы тәкдим итеү - быларҙың барыһы ла беҙҙең гражданлыҡ позициябыҙҙы күрһәтә.

Һүҙҙәремде дөйөмләштергәндә, уҡырға, эшләргә, бер-береңә ярҙам итергә онотмаһаҡ ине. Беҙ бергә саҡта, инде-иңгә терәп торғанда бөтә ҡаршылыҡтарҙы ла, ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырға һәләтлебеҙ.

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Йәй көндәре нисек үтә: тәбиғәт ҡосағында, йылға, диңгеҙ буйҙарындамы, әллә баҡсала көсөргәнешле хеҙмәт, емеш-емеш йыйыу менәнме, әллә ейән-ейәнсәрҙәр менән мәж килеү өҫтөндәһегеҙме?

**_Эльвира СӘЛИХОВА, Көйөргәҙе районы:_** Йәйге ялым, йылдағыса, емеш-еләк йыйыу, баҡса уңыштарын йыйып эшкәртеү, ҡышҡылыҡҡа запас туплау менән үтә. Баҡсама иртә яҙҙан уҡ күңел биреп ҡарайым: төрлө йәшелсә-емеш, еләк-емеш үҫтерәм, һәр үҫентене һаҡлап, ваҡытында сығарып, ауырыуҙан һаҡлап тәрбиәләйем.

Йәй еткәс, уңышының муллығына һөйөнөп, еләк-емеште оло һауыттарға йыям, ҡайнатма, компот ҡайнатып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләйем. Сейә, алма, ҡарағат, алманан барыһы бергә йөҙләгән банка компот ябам. Әллә ҡайҙа, әллә нисек эшләнгән һуттарҙы ғүмерҙә лә һатып алғаным юҡ. Алғаным да, эскәнем дә булманы, балаларға ла шулай өйрәттем. Ҡыяр, помидор тоҙларға әле саҡ ҡына иртәрәк, шулай ҙа банкалар, ҡапҡастар күптән әҙерләп ҡуйҙым инде. Ҡыш еткәс, үҙем эшләгән һуттар, компоттар, ҡайнатмалар, үҙ баҡса емешенән әҙерләнгән витаминлы салаттар - минең тырышлығымдың емеше, күңелемдең йылыһы барыһы ла өҫтәлгә ҡунаҡлай, балаларға, туғандарға, дуҫтарға күстәнәскә китеп бөтә.

Үҙ ҡулың менән үҫтергән помидор, ҡыяр, кишер, башҡа төрлө емеш-еләк - уларҙың тәме магазиндағынан бөтөнләй айырыла. Һуңғы йылдарҙа ҡауын да, баклажан да, баҡса еләге лә үҫтерә башланым. Грушаны ла балалар ҙа, ейән-ейәнсәрҙәр ҙә яратып ашай. Ҡыш көндәрендә табын түрендә үҙем әҙерләгән ашамлыҡтарҙы күреп, рәхәтләнеп, хуш еҫенә, саф тәменә һоҡланып, рәхәтләнеп ашар өсөн отпускымды йыл һайын йәй айына тура килтереп алам. Йәйге ялым шулай үтә инде. Отпускынан эшкә арып сығам, әммә ғаиләмдең сәләмәт туҡланыуына булышлыҡ итәм, бала саҡтан килгән оҫталыҡ, тырышлыҡ, тыуған ергә ихтирам булдырған ошо шөғөлөм, ошо булмышым - минең яҙмышым, ғорурлығым.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күрҙегеҙме, уҡынығыҙмы, һығымта эшләнегеҙме: беҙҙең халыҡ шулай ял итә. Хеҙмәт ғәле йәнәптәре һәр саҡ уның йәнәшәһендә. Маҡсат та изге: ул үҙе һәр саҡ хәрәкәттә һәм бәрәкәттә. Ул - тәбиғәт балаһы, уның иғтибары тирә-йүндең именлеген күҙәтеү генә түгел, ә тәбиғәт биргән байлыҡтан һәм хозурлыҡтан файҙаланыу. Дөрөҫ булдымы был һығымта?**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# ЙӘШЕРЕН ОСРАШЫУ НИ КҮРҺӘТЕР?

**Украин дрондары Рәсәй биләмәһенә һөжүмде дауам итә. 3 август төнөнә ҡарай шартлатҡыс аппараттар яуҙырыу айырыуса Ҡара диңгеҙ йүнәлешендә әүҙемләште: был төн Рәсәйҙең төрлө тарафтарына осоролған 93 самолет рәүешендәге дронды, шул иҫәптән Ҡара диңгеҙ акваторияһы өҫтөндә 60 аппаратты беҙҙең Һауа һөжүменә ҡаршы көстәр атып төшөрҙө.**

Украина Ҡоралллы көстәре көн һайын Рәсәй биләмәләренә йөҙәрләгән дрондар осора һәм аңлы рәүештә граждандар объекттарына һөжүм итә; бының менән дошман урындағы халыҡ араһында ығы-зығы тыуҙырып, илдәге эске тотороҡлолоҡто ҡаҡшатырға уйлай. Мәғлүм булыуынса, үткән аҙнала беҙҙең көньяҡ ғәскәр төркөмө яугирҙарыбыҙҙың фиҙаҡәр батырлыҡтары һәм тонналаған снарядтар ярҙамында Донецк халыҡ республикаһының ошоға тиклем Киев контролендә булған һәм 2024 йылдың яҙынан бирле уның өсөн алыштар барған Часов Яр ҡалаһын алыуға иреште. Республиканың төньяҡ өлөшөндә Донецкиҙан - 60 һәм Артемовскиҙан ни бары 5 -7 км арала ҡалҡыулыҡта урынлашҡан был ҡаланы алыу МХО тарихында иң ҡатмарлы һуғыштарҙың береһе булды, тип яҙа хәрби хәбәрсе Иван Петров RGRU баҫмаһында.

Часов Ярҙы алыу Рәсәй командованиеһының стратегик еңеүе тип баһаланды. Уның әһәмиәтен РФ Президенты Владимир Путин 1 августа Беларусь лидеры Александр Лукашенко менән Валаамда осрашыу мәлендә лә журналистар алдында билдәләп китте. Был сарала Путин Украина конфликтын көйләүҙә Мәскәүҙең элеккесә үҙ шарттарынан сигенмәүен тағы бер тапҡыр телгә алды. Шулар иҫәбендә ул Рәсәй составына ингән дүрт территориянан Украина ғәскәрҙәрен сығарыу һәм Киевтың НАТО-ға инеү ниәтенән баш тартыуына өлгәшеүҙе айырым билдәләне.

Ләкин Махсус хәрби операцияның Рәсәй өсөн төп маҡсат булған был шарттарҙы АҠШ президенты ишетергә лә, аңларға ла теләмәй, үҙенекен ҡайыра: фәҡәт унынса булырға тейеш. Бер ҡараһаң - 50, икенсе ҡараһаң 10 көн ваҡыт биреп, туҡтауһыҙ ультиматум ҡуя; ике ил араһындағы ябай булмаған конфликтты яртылыҡ юлда хәл итергә теләй. Шул уҡ ваҡытта үҙе әле вәғәҙә иткән өҫтәмә санкцияларҙың Мәскәү өсөн һөҙөмтәле булырына ышанмай ҙа. Сараһыҙҙан, күрәһең, ул бынан алдағы визиттары мәлендә Кремль коллегалары араһында абруй яулап өлгөргән һәм Трамп хакимиәтендә Рәсәйгә иң ыңғай, объектив мөнәсәбәттә булған махсус вәкил Стив Уиткоффты тағы ла Мәскәүгә ебәрергә ҡарар итте. Был юлы АҠШ президенты илсеһе Трамптың башҡаса "уйындар уйнамаясағы" һәм шуға ла эштең етди тороуы: йә килешеү, йә ҡаты саралар менән тамамланасағы тураһында Путинды иҫкәртергә килә, ти сәйәси күҙәтеүселәр. Ысындан да, 8 августа 10 көнлөк ультиматум ваҡыты үткәндән һуң Дональд Трамп Украинаға яңы AMRAAM ракеталары ебәрә башлаясағы хаҡында белдерә. Ошондай уҡ ракеталарҙы АҠШ-тың союздаштары Дания, Бельгия, Япония, Нидерланды, Канада, Германия, Венгрия, Испания, Польша, Швеция, Тайвань, Швейцария, Израиль һәм Кувейт та аласаҡ. Ә бына Украинаның ҡасан һәм күпме ракета аласағы әлегә иғлан ителмәй. Америка конгрессвумены Марджори Тейлор Грин Украина конфликтын финанслауға ҡырҡа ҡаршы сыҡты һәм быны Америка халҡына хыянат тип атаны: "Сит илдә барған конфликтҡа ҡыҫылып, ниндәйҙер бер илгә кеше үлтереү өсөн аҡса түләү күпселек американдарҙың ҡарашына тап килмәй, АҠШ президенты итеп Дональ Трампты һайлағанда, беҙ уның сит конфликттарҙы финанслауҙы туҡтатырға вәғәҙәһе өсөн уға тауыш бирҙек",- тине ул.

Ә шул арала Украинала ығы-зығы булып ята. Беренсенән, Швейцариялағы Альп тауҙары курорттарының береһендә АҠШ менән Британия вәкилдәре Украина президенты офисы башлығы Андрей Ермак, Украина хәрби разведка башлығы Кирилл Буданов ҡатнашлығында ВСУ-ның элекке баш командующийы, әлеге ваҡытта Британияла илсе Валерий Залужныйҙы Зеленский урынына президент итеп һайлау буйынса йәшерен осрашыу үткәрҙеләр. Американың сәйәси аналитигы Скотт Риттер белдереүенсә, Альптағы йәшерен осрашыу Зеленский режимының юҡҡа сығыуының башланыуын белдерә. "Известия" гәзите сайтының ошо мәсьәләгә ҡағылышлы үткәргән һорау алыуҙар һөҙөмтәһе шуны күрһәтте: президент итеп Залужныйҙы тәғәйенләү Украина конфликтын көйләүгә булышлыҡ итмәйәсәк.

Унан һуң илдә халыҡ араһында көсәйә барған протест сығыштары ла Киев режимының ҡаҡшауға табан барыуын раҫлай. Киевта һәм башҡа ҡалаларҙа әле генә коррупцияға ҡаршы ведомстволарҙың вәкәләтен сикләүгә ризаһыҙлыҡ белдергән сығыштар тамамланыуға, Винницала мәжбүри мобилизация алып барыусы хәрби комитеттарҙың башбаштаҡлығына ҡаршы болалар башланды. Урындағы мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, ҡаланың "Локомотив"стадионына 100-гә яҡын ир-егетте килтереп тултырғас, протеста ҡатнашыусылар стадион ҡапҡаһын емереп, майҙанға үтеп инергә теләне, ләкин полиция уларҙы ҡаты көс ҡулланыу юлы менән туҡмап, газ һиптереп, ҡыуып таратты, күптәр ҡулға алынды...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың AY YOLA төркөмө Ҡырымда "Таврида. АРТ" фестивалендә сығыш яһағанда гендер-пати үткәргән. Музыканттар был хаҡта социаль селтәрҙә яҙған. "Тавридала сығыш яһағанда беҙҙең менән күңелле хәл булды. Залдан яҙыу яҙып бирҙеләр һәм беҙ сәхнәнән бер ғаиләнең бәпәй көтөүе тураһында иғлан иттек. Ҡыҙ бәхетле булып үҫер тип ышанабыҙ, сөнки был көндө уның баш осонан, барлыҡ тамашасылар өҫтөнән кеүек үк, бәхет ҡошо Һомай осоп үтте", - тип яҙған музыканттар.

✓Салауат Юлаев һәйкәлен яңыртыу эштәре Өфөнөң махсуслаштырылған цехында башҡарыла. Был хаҡта һәйкәлде реставрациялау телеграм-каналында Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы идаралығы етәксеһе, Салауат Юлаев һәйкәлен һаҡлау буйынса күҙәтеү советы рәйесе Салауат Ҡолбахтин белдерҙе. "Иғтибар иткән булһағыҙ, социаль селтәрҙә лә, төрлө майҙансыҡтарҙа ла Сосланбәк Тавасиевтың иҫке фотолары баҫылып сыҡты, унда күренеүенсә, һәйкәл цех шарттарында ҡойолған, уны йыйыу эштәре лә цехта башҡарылған, һуңынан Өфөгә килтерелгән", - тип яҙа Ҡолбахтин.

✓Удмуртстандың Республика клиник йоғошло сирҙәр дауаханаһы делегацияһы Башҡортостандың инфекциялар дауаханаһында булды. Сәфәрҙең маҡсаты тәжрибәһе менән алмашыу һәм республикала, атап әйткәндә, Республика йоғошло сирҙәр дауаханаһында эште ойоштороуҙы тәрәнерәк өйрәнеү. Бындай сәфәрҙәр һәм белем менән алмашыу системалы үҫеш һәм медицина хеҙмәтләндереүе стандарттарын күтәреү өсөн нигеҙ булып тора, тип иҫәпләйҙәр БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

✓Һаңғырауҙар спорты буйынса Рәсәй чемпионаты һәм беренселеге һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың йыйылма командаһы "еңел атлетика" дисциплинаһында 32 команда араһында 2-се урынды алды. 18 йәшкә тиклемге ҡатнашыусылар беренселегендә Варвара Филиппова алтын миҙалға лайыҡ булды. Денис Усманов 4х400 метрҙа - алтын, 4х100 метрҙа көмөш призер булды. Ильяс Бикбулатов 800 метр дистанцияла 4-се урынды алды һәм шәхси һөҙөмтәһен яҡшыртты.

✓Синоптиктар август айына һауа торошо менән таныштырҙы. Башгидромет хәбәр итеүенсә, августа уртаса айлыҡ һауа температураһының нормаға ярашлы булыуы көтөлә. Йәйҙең һуңғы айында норма +17,2 градус. Айлыҡ яуым-төшөм күләме лә нормаға яҡын булыр, тип фаразлана. Августа ғәҙәттә яуым-төшөм 45-65 миллиметр тәшкил итә, тип билдәләне белгестәр.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Тәбиғәтте боҙоуға табу

Башҡорт халҡының "Аҡ бүре" әкиәтендә әсәләрен эҙләргә сыҡҡан өлкән ул, шунан уртансы ул, юлдаштары менән ҡара урманға инеп, аттарын буш ебәреп, үҙҙәре йөшел үләнгә төшәләп яталар. Улар янына бер кеше килә лә:

- Кем ҡушты һеҙгә бында килеп, рөхсәтһеҙ минең урманымды, үләнемде тапап йөрөргә? - ти.

- Кит бынан, ҡауғалама, һин бер үҙең, беҙ күмәк. Юғиһә, үҙеңде һәләк итербеҙ, - ти егеттәр.

Шул саҡ урман кешеһе әпсен-төпсән уҡый ҙа тегеләргә ҡарап өшкөрә. Былар шул урында таш булып ҡата ла ҡуя.

"Уғланы Ҡороҡса батыр" әкиәтендә килен йөрәшергә алыҫ юлға сыҡҡанда, өйҙә ҡалған Ҡороҡса әйтә: "Ике ерҙә хәтәр бар, шунда туҡтамағыҙ. Матур йылға буйында ҡунмағыҙ, матур күл бар, унда ла ҡунмағыҙ". Әйләнеп ҡайтып килгәндә йәйрәп ятҡан күл буйында аталары ҡунмайыҡ тип ҡарай, уландары тыңламай. Иртәнсәк тороуға уларҙы бер аждаһа, ҡойроғон ауыҙына ҡабып, өйләндергән дә ятҡан. Ҡороҡса батырға шул арҡала байтаҡ һынауҙар үтеп, көләшен аждаһанан ҡотҡарырға тура килә.

"Юлбат" әкиәтендә егеттәрҙе йыртҡыс януарҙарҙан ҡотҡарған бүре әйтә: "Был тау бер юхаҡың төйәге. Бындағы бер әйберҙе лә теймәгеҙ, һыуын эсмәгеҙ, алмаһын ашамағыҙ". Юлбат тыйыуға ҡарамаҫтан, ағалары тауҙан сылтырап аҡҡан, тирә-яғында алмалары ҡыҙарып бешкән алмағаслы шишмә буйында ятып ҡала, һыуын эсә, алмаларын өҙөп ашай. Йоҡлап ятыусыларҙы иҫ китмәле дәү йылан урап ала. Ағайҙарын сығарған өсөн Юлбат аждаһа йәнә батша ҡуйған бөтә ауыр шарттарҙы үтәй. Шулай итеп, тыйылған ерҙә тән ҡунырға, һыу эсергә, емештәрҙе ашарға, рөхсәтһеҙ болондарҙы тапарға, урманды ҡыйратырға ярамай.

Ғөмүмән, кеше илаһи ҡеҙрәткә эйә тәбиғәт менән аңлашып, ерҙәге урынын төшөнөп, уны иң яҡын туған кеүек күреп, һөйөп йәшәргә тейеш. Башҡорт юрау-һынамыштарына бәйле урманда, ҡырҙа ҡыуыш ҡорор, ағас ҡырҡыр, табынға ултырыр алдынан: "Ер хужаһы, ағас эйәһе, ошо урында төйәкләнергә, бесән сабырға, утын ҡырҡырға рөхсәт ит", - тип һорау кәрәк. Нигеҙ ҡоргәнда ла шулай итеү хәйерле. Өй һалғанда асыуланышырға, тиргәшергә ярамай, ҡыуаныу яҡшы. Йәшәр өсөн өй һатып алғанда хужаһын рәнйетеү килешмәй. Бөтәһенә лә тығылыусы, бөтә ерҙә етешеүсе булараҡ, шайтанды иҫкә төшөрөү тыйыла.

Боронғо төркиҙәрҙең бағымсылары, шамандары инаныуынса, урмандар, үҫемлектәр, тауҙар, күлдәр, йылғалар - бар донъя йәнле, бөтә ер-һыу, мөхит рухтар менән тулы, "рух - үҙе тауҙыр, ә тау үҙе - рухтыр". Абдулҡадир Инан "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" китабында яҙыуынса: "Шаман доғаларынан асыҡ аңлашылыуынса, шамандар тау рухтарына туранан-тура мөрәжәғәт итеп, һәр нәмәне тойоусы бер барлыҡ итеп таныған... Бер риүәйәттә һүрәтләнеүенсә, монголдар тарафынан эҙәрләнгән алтайҙар Ҡарағай тауына килеп урынлаша һәм тау рухына арнап ҡорбан сала. Ошо берҙән-бер тау урман менән ҡапланған була, шуға ла монголдар юлды таба алмай. Шулай итеп, алтайҙар ҡотолоп ҡала һәм хәҙергәсә Ҡарағайтау улар өсөн изге тау һанала".

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы бар).**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЯҠТАШЫБЫҘ - РӘСӘЙ ГЕРОЙЫ



**Тағы бер яҡташыбыҙ Рәсәй Геройы исеменә лайыҡ булды. Был турала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙып сыҡты.**

116-сы айырым махсус тәғәйенләнештәге бригада командиры генерал-майор Руслан Ғарифуллинга "Алтын Йондоҙ"ҙо Рәсәй милли гвардияһы ғәскәрҙәре федераль хеҙмәте директоры Виктор Золотов тапшырҙы. Генерал-майор Ғарифуллин ошо юғары наградаға Махсус хәрби операция барышында хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн лайыҡ булды. "Яугирҙарҙың характеры өсөн 116-сы бригаданы "корос һымаҡ" тип йөрөтәләр. Әйткәндәй, Салауат Юлаев исемендәге ике батальоныбыҙ добровольцары тап ошо подразделение составында хеҙмәт итә. Улар төрлө хәрби бурыстарҙы үтәй, Тыуған илебеҙ сиген һаҡлай, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Руслан Вил улын ысын күңелдән ҡотлайым! Республика һеҙҙең менән ғорурлана!"

# КҮГӘРСЕНДЕҢ БАТЫР ЕГЕТЕ

**Республикала "Башҡортостан геройҙары" программаһының һайлау турына үткән яугирҙар араһында Күгәрсен районы Мәксүт ауылы егете Алмаз Ғүмәров та бар**

Дүртенсе класты - тыуған ауылында, унан һуң Ишембай ҡалаһындағы уҡыу йорттарының береһендә кадет класында белем ала үҫмер. "Отҡор булды, дәрестә үк белемде башына һеңдерә, өйгә эшен эшләп ҡайта ине. Әрләп үҫтермәнем. Өҫ хәрби юғары уҡыу йортона документтарҙы тапшырҙыҡ", - ти әсәһе Рузия Ғилметдин ҡыҙы. Конкурс ҙур булһа ла шәхси зачет, Маҡтау грамоталары, Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәһе буйынса Алмаз Новосибирск ҡалаһындағы юғары хәрби училищеға уҡырға инә. 2021 йылда уҡыу йортон тамамлаған йәш офицер йүнәлтмә буйынса Калининград ҡалаһында взвод командиры вазифаһында хеҙмәт юлын башлай. Махсус хәрби операция башланғас, яуға барырға теләк белдерә. Йәш офицер, взвод командиры Алмаз Ғүмәров ҡаһарманлығы өсөн Суворов миҙалына лайыҡ булған. Уның менән бар район хаҡлы рәүештә ғорурлана.

# ОСОУСЫ ҺӨЙЛӘЙ

**"Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға үҙҙәрен тормошҡа ашырыу өсөн яңы мөмкинлектәр бирәсәк. Быға армия авиацияһы осоусыһы өлкән лейтенант Руслан Алсынбаев та ышана.**

Офицер сығышы менән Мәләүездән. Сызрань юғары хәрби авиация училищеһын тамамлаған. Алғы һыҙыҡҡа тиклем хәрби авиацияла мөһим бурыстар үтәгән. Ул Махсус хәрби операция иғлан ителгән тәүге көндәрҙән үк Ми-26 хәрби вертолеты командиры урынбаҫары вазифаһында хеҙмәт итә. Фронтта техника, кешеләр, боеприпастар ташый, хәрби осоштарҙа ҡатнаша. Лайыҡлы хеҙмәте өсөн егет дәүләт наградаһы - Нестеров миҙалы менән бүләкләнгән. Руслан Алсынбаев 8 йыл хеҙмәт иткән осоронда 1000 сәғәт самаһы осҡан. "Хәҙер туғандарыма яҡынырак булырға теләйем. Башҡортостанда минең ата-әсәйем, өләсәйем, һеңлем бар. Үҙ ғаиләмде булдырырға ла теләйем. Шуға күрә "Башҡортостан геройҙары" программаһына ғариза бирергә булдым. Әгәр беҙҙең хәрби һәм идара итеү тәжрибәһе тыуған республикабыҙҙа файҙалы булһа, бик яҡшы, - ти Руслан Алсынбаев. - "Башҡортостан геройҙары" программаһы бик ваҡытлы эшләй башланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдим иткән проект Махсус операцияла ҡатнашыусылар өсөн яңы офоҡтар асыр һәм уларға граждандыҡ тормошонда ойоштороу тәжрибәһен ҡулланыу мөмкинлеген бирер, тип ышанам. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ. Тыуған илде һаҡлауҙа хәрби бурысын үтәгән хәрбиҙәр тиҙҙән өйҙәренә ҡайта башлар. Улар, һис шикһеҙ, йәмғиәттә яңы йүнәлештәрҙә кәрәк буласаҡ яңы күнекмәләргә эйә хәҙер. "Башҡортостан геройҙары" программаһы һалдаттарҙың һәм офицерҙарҙың артабанғы тормошонда мөһим баҫҡыс буласаҡ".

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# АВГУСТ АҘАҒЫНА ТИКЛЕМ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров буласаҡ хәрби хеҙмәткәрҙәргә ярҙам сараһы тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Уның буйынса, МХО биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән яҡташтарыбыҙға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын август аҙағына тиклем оҙайтты. Радий Хәбиров ҡул ҡуйған тейешле указ республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Башҡортостанда контрактсыларға түләүҙәр күләме 1 миллион һум тәшкил итә. Бөгөнгә контрактсыларға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең дөйөм суммаһы - 1 700 000 һум. Шуның 1 300 000 һумы - республиканан, ҡалғаны федераль бюджеттан бүленә. Бынан тыш, Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре өсөн 50-нән ашыу ярҙам сараһы бойомға ашырыла.

# ЯУГИР БАЛАЛАРЫНА...

**Башҡортостанда МХО яугирҙарының балаларына транспортта бушлай йөрөү ҡағыҙәләре билдәләнде.**

Льгота менән мәктәп уҡыусылары ла, урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарының көндөҙгө бүлектәрендә уҡып йөрөгән 23 йәшкә тиклемге студенттар ҙа файҙалана ала. Быға тиклем МХО-ла ҡатнашыусыларҙың балалары өсөн уҡыған осорҙа йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү өсөн ғаризаларҙы мәктәптәр һәм колледждар аша ҡабул итәләр ине. Хәҙер Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарына йәки Күп функциялы үҙәк офистарына ғариза бирәләр. Ғаиләның ата-әсә, законлы вәкил йәки бәлиғ булған бала үҙе тапшыра ала. 2025 йылдың 20 августынан республиканың Дәүләт хеҙмәттәре порталы ла ғаризалар ҡабул итә башлай. Льгота алыу өсөн документтар исемлеге социаль ярҙам үҙәге сайтында баҫылған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, электрон юл йөрөү билеты айына 60 тапҡыр бушлай йөрөргә хоҡуҡ бирә.

# ЯРАЛАНҺАҢ...

**Рәсәйҙә ил Президенты Владимир Путин указы менән Махсус хәрби операция биләмәһендә яраланыу һөҙөмтәһендә инвалидлыҡ алған яугирҙарға бер тапҡыр бирелә торған түләү 4 миллион һумға тиклем арттырылды.**

Рәсми документта билдәләнеүенсә, әгәр хәрби 2022 йылдың 24 февраленән указ көсөнә ингәнгә тиклем имгәнгән булһа, бер тапҡыр түләнергә тейешле аҡса, яраланғанда бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе иҫәпкә алып, "Ватанды һаҡлаусылар" фондынан бирелә. Шулай уҡ яугирҙарға Махсус хәрби операция биләмәһендә төрлө тән йәрәхәттәре (яраланыу, имгәнеү, контузия) алған осраҡта 3 миллион һумға тиклем аҡса түләнә. Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған документ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Указ ҡул ҡуйған көндән - былтыр 13 ноябрҙән көсөнә инде. Билдәле булыуынса, Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға 40-тан ашыу ярҙам сараһы күрһәтелә. Республиканың ошо йүнәлештәге тәжрибәһен Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә өйрәнәләр.

# ӘСӘ ЯРҘАМЫ МЕНӘН...

**Ошо көндәрҙә Ҡырмыҫҡалы районының Ҡарлыманбаш ауылында МХО-ла һәләк булған яугирҙар иҫтәлегенә "Абдулла" мәсете асылды.**

Иҫке Бәпес ауыл советы хакимиәте башлығы Азамат Ғәйфуллин хәбәр итеүенсә, был изге эштә МХО-ла һәләк булғандарҙың туғандары ҙур матди ярҙам күрһәткән. Айырыуса МХО-ла һәләк булған яугир Андрей Касьяновтың әсәһе Рәмзиә Фәйзи ҡыҙы Ғималетдинованың ярҙамы ҙур булған. Андрейҙың мосолман исеме - Абдулла, шуға күрә мәсеткә лә геройҙың исемен биргәндәр. Мәсет төҙөлөшөнә Миләүшә Миңлегәле ҡыҙы Баязитова ла ҙур өләш индергән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның улы Илназ һәм ире Илдар яуҙан әйләнеп ҡайтмаған. Ҡарлыманбаш ауылында йәшәүселәр ҙә ситтә ҡалмаған, һәр кем хәленән килгәнсә аҡса биргән, шулай уҡ "Монолит", "Агрохим" йәмғиәттәре, Ҡырмыҫҡалы Юл ремонт-төҙөлөш идаралығы етәкселәре ярҙам иткән. Ҡарлыманбаш халҡы мәсет тураһында күптән хыялланған.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите
14
# Туған телем!
8-14 август (арағай) 2025 йыл
№31 (1175)

УЙЛЫҒА - УЙ

**Туған тел мәсьәләһе бөгөн үтә лә киҫкен тора. Уҫка алған ҡом бармаҡтар араһынан ҡойолған кеүек, милли асылыбыҙҙың төп билдәһе күҙебеҙ алдында юҡҡа сыға. Телебеҙ бишегә булған ауылдарҙа йәшәгән, ата-әсәләре саф башҡортса аралашҡан ғаиләләрҙә лә балалар хәҙер йыш ҡына русса һөйләшә. Беҙ, бөгөнгө быуын башҡорттары, телебеҙ үлеүен күҙәтәбеҙ - аяныслы тарихи күренештең, ҡот осҡос ижтимағи процестың шаһитыбыҙ.**

# ОЛО БЕР РУХИ БАЙЛЫҠТАН...

## мәхрүмләмәйек сабыйҙарҙы




Байтаҡтар был хәлгә битараф ҡарай, көйөнгәндәр, ләкин, ҡалайтаһың, заманы шулай бит, тип проблемаға ситтән ҡараусылар бик күп арабыҙҙа, ниҙер эшләргә, туған телебеҙҙе ҡотҡарып алып ҡалырға ынтылыусылар, үкенескә ҡаршы, аҙсылыҡта. Үҙемдең күҙәтеүҙәремә нигеҙләнеп, 20-25 йылдан башҡорт теле эпизодик күренеш кенә булып ҡаласаҡмы икән, тигән фекергә килдем.

Ул нимәгә нигеҙләнә һуң?

Бөгөнгө көндә 10-12 йәштән алып, яңы теле асылған сабыйҙарға тиклемге быуын вәкилдәре донъялыҡты, үҙенең шәхсәнлеген рус теле аша таный. Улар - киләсәктә дәүләт, ижтимағи-сәйәси, иҡтисади даирәләрҙә әйҙәп алып китәсәк милләттәштәребеҙ, булаcаҡ атай һәм әсәйҙәр. Был балалар туған телдә һөйләшмәһәләр ҙә, уны аңлайҙар. Сөнки атай-әсәйҙәре, ҡартатай-өләсәйҙәре өйҙә башҡортса аралаша. Үҫеп еткәс, үҙҙәре ҡорған ғаиләлә иһә туған тел мөхите булмаясаҡ. Тимәк, тыуаcаҡ балалары башҡортса һөйләшеү түгел, уны бөтөнләй аңламаясаҡ. Шуның менән быуындан-быуынға тел тапшырыу сылбыры тамам өҙөлә. Был хәл үрҙә атап үтелгән осорға тап килер, моғайын.

2009 йылда ЮНЕСКО башҡорт телен "Юғалыу ҡурҡынысы янаған донъя телдәре Атласы"на индерҙе. Һаҡланыу кимәле буйынса уға "йомшаҡ" статусы бирелгән. Йәғни телебеҙҙең ҡулланылыш даирәһе сикле, ул күпселек осраҡта ғаилә эсендә аралашыуға ғына ҡалып бара.

Мәсьәләне яңынан төплө өйрәнеү телебеҙҙең хәлен "ҡурҡыныс янаған" статусына төшөрөүе лә ихтимал. Сөнки һуңғы тикшеренеүҙәрҙән 13 йыл үткән. "Ҡурҡыныс янаған" статус балалар хатта өйҙә лә тел өйрәнмәй, тигәндә аңлата, ә беҙ, үрҙә әйтелгәнсә, тап шул хәлдәбеҙ бөгөн.

Эйе, телебеҙ дәүләт статуcын йөрөтә, уны һаҡлауға, үҫтереүгә йүнәлтелгән закондар ҡабул ителгән, махсус дәүләт грандтары булдырылған. Мәктәптәрҙә башҡорт кластары асылған, балалар баҡсаларында шундай уҡ төркөмдәр эшләй. Тик, миҙалдың ике яғы булған кеүек, дәүләт ҡануниәттәрен ғәмәлләштереүҙә лә төрлө етешһеҙлектәр бик күп. Проблеманы өйрәнеүселәр фекеренсә, тел мәсьәләһендә "ғаилә - балалар баҡсаһы - мәктәп - юғары уҡыу йорто - йәмғиәт" сылбыры эшләмәй. Быны раҫлаған дәлилдәрҙе һәр кем үҙ ғаиләһе миҫалында килтерә ала.

Өйҙә ҡойоп башҡортса һөйләшеп йөрөгән кескәй туғаным балалар баҡсаһының башҡорт төркөмөнә барҙы. Бер айҙан ул, әсә телен онотоп, русса күстә. Баҡһаң, баҡсала тик дәрестәр генә башҡортса алып барыла ла, бөтә аралашыу русса икән. Тәрбиәсегә дәғүә белдергәс, беҙгә өҫтән шулай ҡушалар, тигән яуап алған сабыйҙың ата-әсәһе.

Башланғыс синыфта уҡыған тағы бер кесе туғаным тик яҡшыға өлгәшә, башҡорт теле фәненән "5"ле генә ала. Әсә теленән дәрестәр алыуының һөҙөмтәһе нисек тип уйлайһығыҙ? Вата-емерә "һаумыһығыҙ" тип әйтеүҙән башҡа бер һүҙ ҙә белмәй ул.

Ә юғары уҡыу йорттарында тел өйрәнеү, ғөмүмән, юҡ.

Халыҡтар телдәренең юғала барыуының төп сәбәбе, әлбиттә, уның ҡулланыу даирәһенең үтә лә сикле булыуында. "Язык до Москвы доведет" тигән мәҡәл бар. Уны республикабыҙ ерлегенә күсерһәк, телебеҙ Өфөгә алып барып еткерерме икән?

Милләттең уникаль һыҙаты булып тел тора. Унан һуң, мәҙәниәте, психологияһы, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәре, йәшәү рәүеше килә. Тел белмәгән быуын мәҙәниәтте, йолаларҙы дауам итә алырмы? Әлбиттә, юҡ. Тимәк, тел менән милләт тә юҡҡа сыға.

Нисек кенә булмаһын, дәүләт телде ҡурсалай, уны өйрәнеү, үҫтереү өсөн шарттар булдыра. Беҙҙән иһә балаларыбыҙҙа уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятырға, был өлкәлә уңыштарын дәртләндереп торорға ғына ҡала.

Ошо урында тағы "тик" тип әйтмәйенсә мөмкин түгел. Сөнки олпат өләсәйҙәр, ҡартатайҙар, юғары белемле атай һәм әсәйҙәр өс-дүрт йәшлек сабый алдында был йәһәттән көсһөҙ. Баланың кирелеген енә алмағас, "Башҡортсаға өйрәтеп булмай бит, ҡалайтайым һуң" тип, русса аралашыуға күсә лә ҡуя улар. Был ғәжәйеп феноменды телселәр, психологтар ентекле өйрәнергә тейештәр. Һәлмәк диссертация яҙырлыҡ тема әрәм булып ята.

- Нишләп балаға русса өндәшәһең? - тип шелтәләйем апайымды.

- Аңламай бит башҡортса, - ти ҡәртәсәй кеше, аҡланып.

Унарсы Илһөйәр мине етәкләп алды.

- Пошли со мной играть, - ти матур йылмайып.

- Русса мин аңламайым, башҡортса әйт, - тим уға.

- Олатай, утыр, уйнайыҡ, - тип бөтәһен аптырата сабый.

- Йә, кем бында башҡортса һөйләшмәй? - тим тантана менән апайыма.

Ныҡышҡанда, әҙмә-әҙлекле булғанда, баланы тәҙәтергә мөмкин. Тик беҙ йыбанабыҙ, ҡата башындай сабыйҙың русса һөйләшеп йөрөүендә ирмәк табабыҙ, хатта быны менән ғорурланабыҙ ҙа. "Ул башҡортса белмәй!" тип ебәрәбеҙ, маһая биреп.

Сибай ҡала хакимиәтендә бергә эшләгән, бик таҙа һәм матур башҡортса һөйләшкән коллегам телгә бәйле үҙенең тарихын һөйләгәйне. Атаәсәһе, үткән быуаттың 70-се йылдарында БАМ төҙөлөшөнә китеп, ул алыҫ Байкал аръяғында тыуа. Шунда теле асыла. Алты-ете йәштәр тирәһендә малайҙы йәйгелеккә Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында йәшәгән өләсәһе ҡарамағына ҡалдыралар. "Нимә әйтһәм дә, өләсәйем әйләнеп тә ҡарамай. Асыҡам, һыуһайым, ә иғтибар юҡ. Кәрәк булғас, аҙна-ун көн эсендә башҡортса һөйләшергә өйрәнеп алдым", - тип туған телдә матур белеүе тарихын бәйән иткәйне ул.

Баланы туған теленән мәхрүм итеү - ғәфү итмәслек яңылышлыҡ ул. Булаcаҡ шәхестең рухи донъяһының ҙур бер өлөшөн киҫеп алабыҙ, бәлки, киләсәктә асылаcаҡ киң мөмкинлектәргә юлын ябабыҙ. Кеше һәр саҡ йәмғиәттең бер өлөшө булыуын тойоп йәшәй. Сөнки яңғыҙлыҡ - иң ҙур яза. Шуға ла һәр кем өсөн үҙ халҡының бер ағзаһы булыу бик тә мөһим. Сит ярлыҡамаҫ, үҙендеке үлтермәҫ, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Туған телдә аралашыу нәҡ ошо берҙәмлек, ҡәрҙәшлек тойғоһон бирә лә инде.

Башҡортса белеүҙең тағы бер өҫтөнлөгө - ул беҙгә төрки халыҡтар донъяһына иркен инеп китергә юл аса. Рәсәйҙә, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан, Төркиә илдәрендә төрки телле 200 миллиондан ашыу кеше йәшәй. Ошо ҡәүем менән беҙ еңел аралаша алабыҙ. Минең үҙемә бер ҡаҙаҡ үҙаманы менән тормош хәлдәре тураһында байтаҡ әңгәмәләшеп ултырырға тура килде. Мин башҡортса һөйләнем, ул - ҡаҙаҡса. Бер-беребеҙҙе бик яҡшы аңланыҡ. "Башҡортса белеү нимәгә кәрәк ул?" тип ҡарышҡан балаға ошо дәлилде килтерергә мөмкин. Төркиәлә ял итеү хәҙер бит хәллерәк ғаиләләрҙең ғәҙәтенә ингән.

Күп тел белеү кешенең мәҙәнилеген, аң үҫешен күрһәткән бер билдә икәнен дә онотмайыҡ. Шуға ла бала аңына бәләкәйҙән, туған телде, дәүләт телен һәм, кәм тигәндә, бер сит ил телен белеү мотлаҡ, тип ойотҡо һалыу - иң дөрөҫө. Полилингваль (күп телдәрҙе өйрәнгән) мәктәптәр хәҙер юҡҡа асылмай бит.

Балаларыбыҙҙың телен телевизорҙан туҡтауһыҙ барған сағыу йәнһүрәттәр, бәләкәйҙән ҡулдарына килеп эләккән гаджет боҙа. Тимәк, мөмкин тиклем сабыйҙы уларҙан сикләргә кәрәк. Тел өйрәтеүҙе күҙ буйы өсөн генә ойошторған балалар баҡсалары, мәктәптәр етәкселегенә дәғүә белдереүҙән тартынмау шаҡтай ҙур файҙа килтерер ине, минеңсә. Социаль селтәрҙәрҙә күтәрелгән проблема хәҙер власть органдары тарафынан даими контролдә тотола, ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

Иң элек телде һаҡлау, уны үҫтереү ғаиләнән килә: минән, һинән, унан - һәр беребеҙҙән. Был мәсьәләгә ҡарата битарафлығыбыҙҙы еңмәһәк, телебеҙҙе юғалтабыҙ! Шуға ла эргәбеҙҙә, "мама", "папа", тип йөрөгән сабыйҙы тәҙәтергә йыбанмайыҡ, уға әсә телен өйрәтәйек, мәхрүмләмәйек булаcаҡ шәхесте оло бер рухи байлыҡтан.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН.**

ШАҒИР ҺҮҘЕ

## МИЛЛӘТТӘШКӘ

*Хоҙай биргән хазинам ул*
*Телкәйем.*
*Күңеләмә һәр ынйыһын*
*Теркәйем.*
*Әсәйемдән күскән миңә*
*Нур булып.*
*Көс алыр ҙа, сығыр йәнә*
*Урғылып.*
*Башҡортомдоң мөһөрө ул,*
*Рух заңы.*
*Алмаштырмаҫ уны инглиз,*
*Руссаһы.*
*Ғаризалар яҙып унан*
*Биҙмәйек.*
*Балаларға һеңдерер юл*
*Эҙләйек.*
*Хоҙай биргән ниғмәттең тел*
*Олоһо.*
*Йөҙ сөйөрмә унан,*
*Башҡорт балаһы!*

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**

# ТУҒАН ТЕЛДЕ

## уны дөрөҫ

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - 53 йыл дауамында башҡорт телен уҡытыу методикаһы проблемаларын ғилми-ғәмәли яҡтан хәл итеү өҫтөндә эшләгән педагог-методист Вәкил Исмәғил улы ХАЖИН. Ул - педагогика фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы алдынғыһы, Рәсәй Федерацияһының почётлы юғары һөнәри белем биреү хеҙмәткәре.**

**Был фани донъяла ике төрлө ҡиммәт бар: ата-бабаларыбыҙҙың матди һәм рухи мираҫы. Халыҡтарҙың туған телдәренән дә аҫылыраҡ башҡа бер рухи ҡиммәт юҡтыр ул. Ә башҡорт теленең боронғолоғон ғалимдар ҙа раҫлай, үҙебеҙ ҙә һиҙенәбеҙ. Телебеҙ ностратик телдәр иҫәбенә инә: уның лексик составында иң боронғо өндәре булған йөҙәрләгән, бәлки, меңәрләгән һүҙ тамырҙары һаҡланып ҡалып, хәҙерге заманға тиклем килеп еткән. Был тамырҙар башҡа ғаилә телдәрендә лә бар. Башҡорт телен кешелектең тәү телдәренең береһенең дауамы, тип әйтеп була. Шуға ҡарамаҫтан, ЮНЕСКО ойошмаһы телебеҙҙе юғалыу хәүефе янаған телдәр иҫәбенә индерҙе. Ни өсөн?**

- Ысынлап та, башҡорт теле ғәжәп рәүештә һаҡланып ҡалған тел ул: меңәр йылдар дауамында юҡҡа сыҡмаған телебеҙ ни рәүешле бөгөн килеп бөтөргә тейеш һуң? Юҡ, ул бер ҡасан да Ер йөҙөнән юғалмаясаҡ, бөтмәйәсәк. Тик уны бөтөрөргә тырышыусылар ғына бар. Тарихыбыҙҙа ҡасандыр 2 миллиондан ашыу, бәлки, тағы ла күберәк тә булған халҡыбыҙҙың, һуғыштар, социаль һәләкәттәр һөҙөмтәһендә 200 меңгә генә тороп ҡалған осорҙары ла билдәле. Быуаттар буйына дауам иткән ҡыҫымдарға, ихтилалдар ваҡытында кисерелгән иҫ китмәле юғалтыуҙарға ҡарамай, шул замандың сәйәсәтенә ярашлы, һүнергә, бөтөргә тейеш булһа ла, тарихи аренанан юғалмаған, яңынан демографик үсеш кисергән башҡорттар. Иң ауыр замандарҙа ла бөтмәгән халҡыбыҙ XXI быуатта ни сәбәпле бөтөргә тейеш һуң әле?

**Республикабыҙға нигеҙ һалыусыларҙың береһе, бар төрки донъяһы хөрмәт иткән Әхмәт-Зәки Вәлиди Туғандың мәңгелеккә төбәп әйтелгән һүҙҙәрен нисек итеп онотмаҡ кәрәк: "Мин үҙем, боронғоларҙы белгәнлектән, уңышһыҙлыҡҡа осраған сәғәттәрҙә һис бер ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем... Беҙҙең милләтебеҙ, аҡтамыр киҫәге кеүек, тупраҡ араһында бәләкәй генә киҫәге ҡалһа ла, яңынан терелеп, бөтөн баҡсаға таралыр...**

- Эйе, йәшәйеше быуаттар төпкөлдәренә барып тоташа бит халҡыбыҙҙың: уның сал тарихы бөгөнгөбөҙҙө бар иткән һәм киләсәгебеҙгә лә юл аса. Бөйөк рус яҙыусыһы Лев Николаевич Толстой үҙ заманында "Башҡорттарҙан Геродотлыҡ аңҡый", тип тикте юҡҡа ғына яҙмағандыр ул. Бынан 2 мең ярым йыл элегерәк "тарих атаһы" тип нарыҡланған философ һәм тарихсы Геродот беҙҙең ата-бабаларыбыҙ хаҡында фәһемле мәғлүмәт теркәп ҡалдырған. Ул Гиперборей тип атаған тауҙарҙың Урал тауҙары булыуын, уның итәктәрендә йәшәгән аргиппей исемле ҡәүемдең йәшәү рәүешенең, кейемдәренең, ниҙәр менән туҡланыуының ата-бабаларыбыҙҙыҡына тап килеүен тарихсы-ғалимдар ҙа раҫлай.

**Мәшһүр шағирыбыҙ Мостай Кәримдең ошондай фәһемле шиғыр юлдары иҫкә төшә:**

**"Йөҙәтмәһен әжәл юраусылар,**
**Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ,**
**Үҙебеҙҙең йырыбыҙҙы йырлап,**
**Тарих арбаһында барасаҡбыҙ".**

- Әлбиттә, халҡыбыҙҙың бөгөнгө йәшәйеше, киләсәге менән бәйле проблемалар бар ул. Әммә үҙебеҙҙең етешһеҙлектәр бар икән, уны башҡа халыҡтарға япһарырға ярамай. Кемдәрҙер туған телен белмәй икән, шулай уҡ уларға тота килеп ғәйеп тағыу дөрөҫ булмаҫ: был уларҙың ғәйебе түгел, бәләһе. Беҙ хәҙер шундай ижтимағи халәттә ҡалғанбыҙ: күп нәмәләр халыҡ теләгәндән генә үҙгәрмәй. Быны бәғзе бер зыялыларыбыҙ Башҡортостанды Татарстан менән сағыштыра ла, уфтана башлай. Быны ла хуплап булмай. Республикаларыбыҙҙың хәҙерге осорҙағы мөмкинлектәре бер кимәлдә түгел, беҙ үҙ ихтыяждарыбыҙҙы ысынбарлыҡҡа ҡарап ҡәнәғәтләндерергә мәжбүрбеҙ. Булғанына ҡәнәғәт булыу, ошо булғанды ҡәҙерләп һаҡлай алыу мөһим. Өлгәшкән уңыштарыбыҙ менән ғорурланырға хаҡыбыҙ бар. Әммә, бер яҡтан - үкенеү, икенсе яҡтан, маһайырға тырышыу һис кәрәкмәгән ғәмәлдәр. Үҙебеҙҙе кемдәндер алдынғыраҡ, өҫтөнөрәк, йә иһә кәмерәк тип һанау рухи мөхитебеҙ өсөн зыянлы.

Халҡыбыҙҙың йәшәйешендә билдәле бер етешһеҙлектәр бар, тип, сал башыбыҙға көл һибеп ултырыу ирлек түгел: проблемалар элек тә булған, киләсәктә лә буласаҡ. Улар булған өсөн генә башҡаларға ҡырын ҡарарға хаҡыбыҙ юҡ. Һис йәшерен түгел: әле бик күптән түгел генә халҡыбыҙҙа кәмһенеү комплексы һыҙаттары бар ине. Ваҡытында баш ҡалабыҙҙа башҡортса аралашып йөрөгән кешеләрҙе көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫ инең. Бөгөн берәүҙәр рустарға яраҡлашабыҙ тип, тик русса ғына, икенселәре татарса аралаша башлағайны. Әрме хеҙмәтендә йөрөп ҡайтҡан ҡайһы бер егеттәребеҙҙең ауылдарында русса һуҡалап маташыуы ла хәҙер бер анекдот һымаҡ ҡабул ителә.

Тәүләп баш ҡалабыҙға 1962 йылда килгәйнем. Урамда бер билдәле шағирыбыҙҙың кем менәндер татарса һөйләшеп торғанын ишеткәс, ныҡ аптырағайным: ул бит минең өсөн башҡорт шағиры ине. Аҙаҡтан бөйөк йырсыбыҙ Мәғәфүр Хисмәтуллин менән аралашып йәшәнек. Уның былай тип әйткәне хәтеремдә ҡалған: "Өфөлә бер мин генә башҡорт, ахырыһы, тип көйөп йөрөнөм". Әммә ваҡыттар үтә килә, беҙ ошондай тайпылыштарҙан ҡотола алдыҡ. Хәҙер хәл тамырынан үҙгәрҙе: урамдарҙа, транспортта, төрлө ойошмаларҙа башҡорттар рәхәтләнеп, һис бер тартынмайынса туған телендә аралашып йөрөй.

**Был һуңғы бер нисә тиҫтә йылда халҡыбыҙҙың бик әүҙем ҡалалашыуы, йәғни урбанлашыу процестары менән дә бәйлеләр...**

- Уныһы шулай. Әммә тап 90-сы йылдарҙа, оло илебеҙҙә барған кардиналь үҙгәрештәр осоронда милләттәштәребеҙҙең милли үҙаңы әүҙем үҫешә башланы, милли, рухи күтәренкелек шарттарында туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу дөйөм маҡсат булараҡ ҡабул ителде.

**Баш ҡалабыҙҙа М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт драма театрының, М.Кәрим исемендәге Йәштәр театрының, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының башҡорт мөхитен әүҙемләштереүгә булышлыҡ итеүе хаҡында ла әйтеп үтергә була.**

- Улай тиһәң, был сәнғәт ойошмалары совет осоронда ла эшләп килде. Әммә тейешле социаль шарттар, ижтимағи ихтыяж булмағас, милли үҙаң түгел, интернационаллек, совет идеологияһы өҫтөнлөк итте. Ғөмүмән, беҙ бөтәбеҙ, тигән зыянлы фекерҙән ваз кисеү зарур. Халҡыбыҙҙы, телебеҙҙе яҡлау һәм һаҡлау буйынса маҡсатлы, киң йүнәлешле ғәмәлдәребеҙҙе әүҙемерәк башҡарайыҡ, тим. Хәҙер һүҙ менән түгел, ҡылған ғәмәлдәребеҙ менән үҙебеҙҙе күрһәтә, камиллаштыра алабыҙ. Телебеҙҙе һаҡлайыҡ, тип, күп һөйләйбеҙ, әммә бының менән генә изге маҡсаттарыбыҙға өлгәшә алмабыҙ. Был бик күп яҡлы эш.

Беренсенән, балаларыбыҙҙың, йәштәребеҙҙең милли аңын, рухын иртәрәк формалаштырабыҙ тиһәк, уларҙың ата-бабаларының кем һәм ниндәй булыуҙарын, шәхси шәжәрәләрен белеүен тәьмин итәйек. Уларҙың үсешеп килеүсе аңына бына ошондай формуланы һеңдерәйек: "Нәҫелең башҡорт икән, ата-бабаларыңдың теленә тоғро ҡал!"

Икенсенән, һәр ғаилә мөхитендә тик башҡортса ғына аралашыуҙы үҙенә күрә бер модаға әүерелдереүгә өлгәшәйек.

Өсөнсөнән, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы үҙгәртеп ҡорайыҡ, уҡыусыларҙың туған телен үҙләштереү процесын камиллаштырайыҡ.

Дүртенсенән, балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе фекерле, маҡсатлы йәшәргә, киләсәк тормошон алдан ҡайғыртып, белеменә, холҡона, теләгенә ярашлы һөнәр һайларға, башҡорт мөхитенән ситләшмәҫкә өйрәтәйек.

Ҡабатлап әйтәм, йәштәребеҙҙең милли үҙаңы формалашыуында ғаилә һәм ижтимағи мөхит йоғонтоһо беренсе урында торһа, мәктәп йылдарында уҡытыу-тәрбиә эшенең һөҙөмтәле булыуы хәл иткес роль уйнай.

**Башҡортса аңламаған, уҡый-яҙа, иркен һөйләшә белмәгән кеше бер ҡасан да башҡорт әҙәбиәтенә ижади шәхес булып килә алмаясаҡ. Бында ғаилә мөхитенән башҡа, балаларҙың мәктәптәрҙә башҡорт телен уның барса нескәлектәрендә үҙләштерә алыуы проблемаһы алғы планға сыға.**

- Башҡорт телен дөрөҫ итеп уҡытыу хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, иғтибарыбыҙҙы бына нимәләргә бермә-бер арттырыу хаҡында әйтеп үтер инем.

Хәҙерге осорҙа республикабыҙ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу 3 төрлө йүнәлештән тора, йәғни 3 төрләгә бүленә. Ошоға ярашлы, уҡытыу программалары һәм методикалар һайлап алына: 1) рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу; 2) рус телле ҡала һәм район үҙәктәре мәктәптәрендә башҡорт балаларына туған тел дәрестәрен уҡытыу; 3) башҡорт гимназияларында, лицейҙарында һәм башҡорт ауылдарындағы мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу. Шуға ҡарамаҫтан, һуңғы йылдарҙа барса мәктәптәрҙә лә туған телде бер төрләрәк уҡытыу өҫтөнлөк алды. Бының үҙ сәбәптәре бар.

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу индерелгәс, уның методик алымдары өҫтөнлөклө, иң прогрессив тип танылды. Шул өлкәлә эшләгән ғалимдар ысынлап та теоретик яҡтан яҡшы белемле, уҡымышлы заттар. Улар, башлыса, заманса тел тәғлимәтенә, яңы технологияларға таянып эшләй. Шул уҡ ваҡытта улар башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу методикаһын иң алдынғы тип һанап, шуны ғына алға һөрә. Әйтергә кәрәк, улар индергән уҡытыу методикаһы сит ил телдәрен, мәҫәлән, инглиз, немец, француз телдәрен, йә иһә рус телен башҡа милләт балаларына уҡытыу методикаһынан әллә ни айырылмай. Сит ил телдәрен башҡа милләт балаларына уҡытыу методикалары ысынлап та заманса технологияларға нигеҙләнгән: төрлө лингвистик терминдар күпләп индерелә, яҡшынан яҡшы дәреслектәр, уҡыу әсбаптары нәшер ителә, электрон саралар даими ҡулланыла. Улар менән танышһаң, күҙҙең яуын алырлыҡ.

**Ә беҙҙең башҡорт балаларына туған телде өйрәткәндә шундай уҡ методикалар ҡулланһаҡ, уҡытыу процесы һөҙөмтәлерәк булыр инеме һуң?**

- Миненсә, юҡ. Хатта ки уның файҙаһынан зыяны күберәк буласаҡ. Бындай һығымтаға ерлек бар. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу - милләте буйынса башҡорт булмаған балаларға башҡорт телен сит-ят тел булараҡ өйрәтергә тырышыу дәрестәре. Белеүебеҙсә, башҡорт телен уҡытыуҙың ошо линияһы әлегә әллә ни һөҙөмтә бирмәй, бының билдәле бер сәбәптәре бар. Бына үҙегеҙ күҙ алдына килтерегеҙ: дәрестәр теҙмәһенә ярашлы, уҡыусылар башҡорт теле кабинетына инә, уҡытыусының аңлатҡанын тыңлай, ул ҡушҡанды үтәй, ҡағиҙәләрҙе ятлай, күнегеүҙәр эшләй. Дәрестәр йыл әйләнәһенә дауам итә, ә уҡыусылар ысынбарлыҡта үҙҙәре өсөн сит тел булған башҡорт телен ни өсөн үҙләштерергә кәрәк икәнен аңламай. Йыл һайын конкурстар уҙғарыла, яттан шиғырҙар уҡыла, диктанттар яҙыла. Ә призлы урын алған уҡыусыға берәй ябай ғына һорау бирһәң, ул башҡорт телендә йүнләп һөйләм дә төҙөй белмәй.

**Ни өсөн шулай килеп сыға, яңыса уҡытыу методикаларын күккә күтәреп маҡтайҙар дәбаһа?**

- Уҡыусылар телде формаль рәүештә генә өйрәнә, ятлау, ҡаттан-ҡат ҡабатлау уларҙың һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе хәтергә һеңдерә алыуына йүнәлтелгән. Әлбиттә, ошолай итеп уҡытыуҙың кемгәләр файҙаһы ла барҙыр, әммә мин быны бушты бушҡа аударыуға тиңләйем. Нисек булһа ла булһын, ошо беренсе линия буйынса уҡытыу минең өсөн мөһим түгел. Дәүләт финанс сығымдарын ҡаплай, уҡытыусылар, программалар, дәреслектәр бар - уҡыһындар, әйҙә. Исмаһам, башҡорт телендәге өндәрҙе нисек итеп яңғырағанын ишетерҙәр, телебеҙҙең ниндәй бай булыуын аҙ булһа ла белерҙәр, уны өҫтөнмөҫтән генә булһа ла үҙләштерә алырҙар. Әммә бына нимәне

*Башҡорт мәктәптәрендә лә уҡыусылар туған телдәрендә аралаша алған берҙән-бер дәрес - башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Шуға күрә лә ошо дәрестәрҙе мөмкин тиклем һөҙөмтәле итеп уҙғарыу талап ителә.*

# ҺАҠЛАУ...

## уҡытыуҙан да тора



***Тарихыбыҙҙа ҡасандыр 2 миллиондан ашыу, бәлки, тағы ла күберәк тә булған халҡыбыҙҙың, һуғыштар, социаль һәләкәттәр һөҙөмтәһендә 200 меңгә генә тороп ҡалған осорҙары ла билдәле. Быуаттар буйына дауам иткән ҡыҫымдарға, ихтилалдар ваҡытында кисерелгән иҫ китмәле юғалтыуҙарға ҡарамай, шул замандың сәйәсәтенә ярашлы, һүнергә, бөтөргә тейеш булһа ла, тарихи аренанан юғалмаған, яңынан демографик үҫеш кисергән башҡорттар. Иң ауыр замандарҙа ла бөтмәгән халҡыбыҙ XXI быуатта ни сәбәпле бөтөргә тейеш һуң әле?***

иҫтә тотоу зарур: башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу бер нисек тә уны һаҡлауҙы тәьмин итә алмаясаҡ.

**Быныһы аңлашыла. 1995 йылда уҙғарылған беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы резолюцияһында ла башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү төп милли маҡсаттарыбыҙҙың береһе итеп ҡуйылғайны...**

- Миңә үҙебеҙҙең башҡорт балаларына башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыу проблемалары мөһимерәк. Әлеге көндә дәрестәр теҙмәһендә "туған тел" тип аталған предмет уҡытыла. Минеңсә, был осраҡта терминологик буталышҡа юл ҡуйырға ярамай: башҡорт мәғарифында туған тел дәрестәре - ул башҡорт әҙәби телендә уҡыу дәрестәре (русса - "родная речь"), шуға күрә яҙма тел дәрестәре "башҡорт теле" тип аталһа, дөрөҫөрәк булыр ине.

**Һуңғы 30-35 йыл дауамында байтаҡ ҡына башҡорт ғаиләләре баш ҡалабыҙҙа, йә иһә бәләкәй ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә төпләнде. Әлбиттә, уларҙың балаларының бер ни тиклеме башҡорт гимназия-лицейҙарында уҡый, әммә рус телле мәктәптәрҙә лә тиҫтәләгән мең башҡорт милләтлле уҡыусылар белем ала. Ошондай мәктәптәрҙә башҡорт балаларына башҡорт телен уҡытыу методикаһы хаҡында аңлатып китһәгеҙ ине.**

- Һеҙ әле әйткән йүнәлеш башҡорт телен уҡытыуҙың икенсе линияһын тәшкил итә. Рус телле мәктәптәрҙә аҙмы-күпме башҡорт кластары ойошторолған, әммә, башлыса, уларҙа белем алған балаларҙы төркөмдәргә бүлеп, "туған тел" тип аталған предмет уҡытыла. Ошо уҡыусыларыбыҙҙың туған телен үҙләштереүенең һөҙөмтәлелеге уҡытыу методикаларын дөрөҫ ҡуллана белеүҙән тора. Тәүҙән үк шуны белдерергә теләйем: әлеге осорҙа ҡулланылған методикаларҙы тамырынан үҙгәртеү фарыз, юғиһә, уҡыусыларҙың башҡорт телен белеү кимәле ҡәнәғәтләнерлек булмаясаҡ. Ни өсөн ошондай талап ҡуйырға мәжбүрмен? Миҫалға 8-се класс дәреслегендә бирелгән бер аңлатманы килтерәм: "Эйәрсән һөйләм баш һөйләмгә 250 юл менән бәйләнә". Йә, ошо аңлатма хаҡында ни әйтер инегеҙ?

**Бындай мәғлүмәттең уҡыусыларға һис бер кәрәге юҡтыр, тим.**

- Тап шулай. Хәҙерге башҡорт теле дәреслектәренән ошондай миҫалдарҙы байтаҡ табып була. Ундай аңлатмаларҙы уҡыусыларҙың хәтеренә һеңдерергә тырышыуҙан бер фәтеүә лә юҡ. Дәреслек төҙөүселәр башҡорт теленең фәнни грамматикаһынан билдәле бер мәғлүмәттәрҙе алған да, артыҡ уйланып тормайынса, дәреслеккә индергән, шул ғына.

Йәнә бер миҫал. 5-се класс дәреслегендә һәр бер килеште өйрәнеүгә берәр параграф бирелә. Бер параграф - бер дәрес. Һис арттырып әйтмәйем: уҡыусыларға килештәрҙе өйрәтеү өсөн 15 минут ваҡыт та етә. Баҡтиһәң, беҙҙең методистар килештәрҙе рус грамматикаһындағы килеш менән үҙгәреш (склонение) темаһына оҡшатып өйрәтергә маташа. Ә рус телендә 3 род, 3 склонение, һүҙҙәрҙең берлектә һәм күплектә килеш менән үҙгәреше бар, унан һуң төрлө һүҙ төркөмдәре төрлөсә үҙгәрә, нәҙеклек билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙең үҙгәреше үҙенә бер төрлө, етмәһә, предлогтарҙы дөрөҫ ҡуя белергә кәрәк. Мин һанап сыҡтым: рус телендә һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреш системаһының 21 төрө бар. Ә башҡорт телендә һүҙҙәрҙең килеш менән үҙгәреше бик ябай, һәр осраҡта ла бер төрлө. Уҡыусыларға 6 килештең исемдәрен, уларҙың һорауҙарын, йәғни барлығы 18 һүҙҙе иҫендә ҡалдырырға ғына кәрәк: төп килеш - кем, нимә; эйәлек килеш - кемдең, нимәнең һ.б.

Уҡыусылар ошо форманы ятлап алалар, икенсе дәрестә уны яҙып ҡабатлайҙар һәм шуға ярашлы күнегеү эштәрен башҡаралар. Шулай уҡ килеш ялғауҙарының таблицаһы менән дә танышҡас, уны ғәмәли ҡулланып, күнегеүҙәр эшләйҙәр. Уҡыусы өсөн иң мөһиме - һәр килештең һорауын иҫтә тотоп, тейешле ялғауҙы ҡушып әйтеү. Әлбиттә, уҡыусының килеш ялғауын һәр осраҡта ла дөрөҫ ҡушмауы ла бар: урманға урынына урманҡа тип әйтеүҙәре бар (әйткәндәй, ҡатай һөйләшендә тап шулай). Әммә дәрестәр барышында уҡыусылар килеш ялғауҙарын ғәмәли рәүештә бик тиҙ дөрөҫ ҡулланырға өйрәнә.

Тағы ла бер тупаҫ хата тураһында әйтмәй булмай. Дәреслеккә эйәлек алмашын индергәндәр, әммә ундай алмаш башҡорт телендә юҡ: барлығы 6 төрлө алмаш бар - зат, күрһәтеү, билдәләү, һорау, билдәһеҙлек һәм юҡлыҡ алмаштары. Дәреслекте төҙөгән уҡытыусынан һорайым: "Эйәлек алмашына миҫал килтерегеҙ", - тим. "Минең, һинең, уның", - тип яуаплай ул. Ә шул эйәлек алмашы төшөнсәһен индергәнсе зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше бирелгән: төп килеш - мин, эйәлек килеш - минең, төбәү килеш - миңә һ.б. Минең, һинең, уның эйәлек алмаштары булғас, миңә, һиңә, уға төбәү алмаштары буламы инде? Был - булмағанды уйлап сығарыуға тиң бит. Баҡтиһәң, рус теле грамматикаһындағы "притяжательное местоимение" тигәндең башҡортса вариантын килтереп сығарғандар икән.

Әлбиттә, дәреслектә теоретик хата бар ни, юҡ ни - бынан яҙма әҙәби телгә зыян юҡ. Беҙҙең дәреслектәрҙә тел теорияһын өйрәнеү өҫтөнлөк итә. Күптән ҡулланылып килгән методика буйынса тәүҙә грамматик төшөнсәләргә аңлатма бирелә, ҡабатлау, ятлау, күнегеүҙәр эшләү талап ителә. Уҡыусы үҙе аңлап бөтә алмаған ҡағиҙәләрҙе ятлап ала, уҡытыусы һораһа, дөрөҫ итеп ҡабатлай. Әммә ғәмәлдә, яҙғанда һәм һөйләгәндә уҡыусы ҡағиҙәне онота: төшөнсәләр бер яҡта, яҙыу, һөйләү - икенсе яҡта.

Ҡабатлап әйтәм, уҡыусыларға телдең теорияһын яттан белеү мөһим түгел. Теоретик төшөнсәләр программаларҙа бар икән, уны ябай ғына итеп аңлатып була. Был бигерәк тә ҡала мөхитендә үҫкән башҡорт балаларына ҡағыла. Уларҙың башҡортса телмәренең үҫешмәгәнлеге барыбыҙға ла билдәле. Уларҙы уҡытҡанда бер принципты һәр даим ҡулланыу кәрәк: башҡорт теленең үҙенсәлектәрен (фонетикаһын, лексикаһын, дөйөм грамматик төҙөлөшөн) рус теле менән сағыштырып биреү мотлаҡ.

**Телдәрҙе уҡытыу буйынса Федераль дәүләт стандарттарында, теоретик ҡағиҙәләрҙән тыш, уҡыусыларҙың ғәмәли күнекмәләрен үҫтереү талап ителә.**

- Һүҙ бер күнекмәләргә генә ҡайтып ҡалырға тейеш түгел. Ҡала мөхитендә, рус мәктәптәрендә уҡыған башҡорт балаларына, башҡорт гимназияларының, лицейҙарының, ауыл мәктәптәренең уҡыусыларына башҡорт телен уҡытыуҙың төп маҡсаты - телде һаҡлау икәнен онотмайыҡ. Педагогик, дидактик, методик проблемалар артында мәҙәни, рухи-ижтимағи ихтыяждар ята. Юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит: телде һаҡлау - илде һаҡлау ул. Бына ниндәй глобаль маҡсат ҡуйылған беҙҙең алға. Һис икеләнмәй, быны дәүләт әһәмиәтендәге маҡсат тип әйтер инем.

Беҙ башҡорт балаларына 11 йыл буйына башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса һабаҡтар бирәбеҙ икән, уны һис бер ҡасан онотмаҫлыҡ, юғалтмаҫлыҡ итеп уҡытырға тейешбеҙ. Хәҙер шундай осорҙо кисерәбеҙ: башҡорт мәктәптәрендә лә уҡыусылар туған телдәрендә аралаша алған берҙән-бер дәрес - башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Шуға күрә лә ошо дәрестәрҙе мөмкин тиклем һөҙөмтәле итеп уҙғарыу талап ителә.

Йәнә бер мөһим нәмә - тел менән мәҙәниәт берлеген иҫәпкә алып уҡытыу. Туған тел - яҙыу һәм уҡыу дәрестәренең эстәлегендә мәҙәниәткә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙең ҙур урын алыуы мотлаҡ. Шулай уҡ тарихи материалдарҙы, халҡыбыҙҙың эске тормошон сағылдырған текстарҙы ҡулланыу файҙалы. Дәрестәрҙең төп өлөшө теоретик төшөнсәләрҙе аңлатыуға йүнәлтелеп, күнегеүҙәр йөкмәткеһе үтә бер төрлө һәм тар булып, өйрәнгән ҡағиҙәләрҙе нығытыу өсөн генә бирелә икән, бынан бер фәтеүә лә юҡ.

Ҡоро һүҙ булмаһын, тиһәгеҙ, бер миҫал килтерәм. Бер саҡ мин башҡорт мәктәбендә уҡыусылар менән анкета уҙғарҙым. Унда шундай һорау бар ине: "Һеҙ ҡайһы уҡыу предметын иң ауыры, тип иҫәпләйһегеҙ?" Уҡыусыларҙың 70 проценты башҡорт телен атаны. Үҙенә ауыр бирелгән предметты уҡыусылар яратамы һуң? Юҡ, әлбиттә. Ни өсөн шулай килеп сыға? Әлеге лә баяғы, дәреслектәрҙә бирелгән меңдән ашыу ҡағиҙәне аңларға, хәтерҙә ҡалдырырға, ҡуллана белергә кәрәк. Туған телендә телмәре йүнләп үҫешмәгән уҡыусыға быға өлгәшеү мөмкин түгел. Уҡытыусылар үпкәләмәһен, ҡайһы берҙә үҙҙәре лә аңлап бөтмәгән теоретик нәмәләрҙе уҡыусыларға аңлатырға тырышалар.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

*✓ Уҡыусыларҙың аңына бер фекерҙе һеңдерә барырға кәрәк: телде белеү - ошо телдә уҡый-яҙа, һөйләшә белеү генә түгел, ә туған телеңдә уйлау, фекерләү, мәғлүмәт туплау алымдарын үҙләштереү, хис-тойғоларыңды белдерә алыу.*

# ТУҒАН ТЕЛДЕ ҺАҠЛАУ...

## уны дөрөҫ уҡытыуҙан да тора

*Мин, үҙебеҙҙең методикаға ярашлы, тел дәрестәрендә башҡорт көйҙәрен, халыҡ йырҙарын даими фон итеп алырға кәрәк, тимен. Бигерәк тә ҡурай моңдарына өҫтөнлөк биреү фарыз. Йырҙарыбыҙ, оҙон көйҙәребеҙ үҙенсәлекле, ул тик бер ритмға ғына ҡоролмаған. Телде моңдан айырыу мөмкин түгел. Унан һуң, беҙҙең оҙон көйҙәр кеше организмына, хис-тойғоларына, зиһененә ыңғай тәьҫир итә икән: медицина белеме булған йәш ғалимәләребеҙ ошо тема буйынса 3 кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған, тип ишеткәйнем.*

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Улай булғас, башҡорт телен уҡытыуҙың дөрөҫ юлын нисек табырға һуң?**

- Тел теорияһын алайыҡ. Төшөнсәләрҙе аңлатҡанда телебеҙҙең үҙенсәлектәрен генә күрһәтеү ҙә етә, шул уҡ рус телендәге төшөнсәләр менән сағыштырып аңлатып була. Уҡыусыларыбыҙ 11 йыл буйына рус телен дә өйрәнә бит.

Бына бер миҫал. Башҡорт теленең фонетикаһын өйрәнгәндә телебеҙгә хас булған 33 өнгә 26 сәғәт (!) ваҡыт бүленә. Ә уны аҙ ғына ваҡытта бик еңел генә өйрәтеп була лабаһа! Уҡыусыларҙың хәтеренә тәүҙә өс һан һеңдерелә: 33 - 9 - 24. Барса өндәр - 33, һуҙынҡылар - 9, тартынҡылар - 24. Уҡыусыларға ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡыларҙы иҫтә ҡалдырыу үтә еңел: а-ә, о-ө, у-ү, э(е)-ы һәм и. Миҫалдар менән нығытыла бара: бала - бәлә, болот - бөгөн, ужым - үҙем һ.б. Тартынҡыларҙың да бүленешен аңлатыуы ауыр түгел: сонор тартынҡылар - 7, яңғырауҙары - 8, һаңғырауҙары - 9. Сонор тартынҡыларҙы уҡыусылар тиҙ һәм ныҡлы итеп иҫтәрендә ҡалдырһын өсөн бер генә һүҙҙе ҡулланыу ҙа етә - йырлауыныңмы: й-р-л-у-н-ң-м. Парлап килгән яңғырау һәм һаңғырау өндәрҙе алфавиттан ҡарап, яҙып алғас, улар ингән өлгө һүҙҙәр парлап бирелә: бар - пар, гөл - көл, дан - таң, баҙ - бәҫ, таж - таш, заң - саң, һан - хан һәм парһыҙ һаңғырау - фән. Һаңғырыу тартынҡыларҙың һүҙ аҙағында килә алыуына миҫалдар килтергәс, һ өнөнөң һүҙ аҙағында килә алмауы, тимәк, яңғырау булыуы хаҡында аңлатма бирергә була. Бына ошоларҙы уҡыусылар аңына 15 - 20 минут эсендә лә һеңдереп өлгөрөргә була.

Башҡорт теле - туған тел дәрестәрендә уҡыусыларҙың аңына, күңеленә даими рәүештә бер фекерҙе һеңдерә барырға кәрәк: телде белеү - ошо телдә уҡый-яҙа, һөйләшә белеү генә түгел, ә туған телеңдә уйлау, фекерләү, мәғлүмәт туплау алымдарын үҙләштереү, хис-тойғоларыңды белдерә алыу. Һөйләмде төрлөсә ҡороп, күп төрлө мөнәсәбәттәр, хис-тойғолар сағылған фекер рәүешендә биреп булыуын аңлата алһаҡ, уҡыусылар ҙа телебеҙҙең ни тиклем бай икәненә төшөнә ала. Мәҫәлән, "Мин һиңә бер нәмә лә әйтмәйем", тигәнде төрлө эмоциялар менән төрлөсә белдереп була: "Әйтте ти бына һиңә, көтөп тор!"; "Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, мин һиңә бер нәмә лә әйтә алмайым"; "Әйтермен мин һиңә бик шәп итеп!" Төрлөсә белдерелгән бер үк фекерҙең йә асыуланыуҙы, йә үкенеүҙе, йә янауҙы белдереүен уҡыусылар ғәмәли рәүештә төшөнә. Беҙҙең башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү ойошмалары өсөн әҙерләнгән дәреслегебеҙҙәге күнегеүҙәрҙең күбеһе уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен үҫтереү маҡсатында бирелә.

Уҡыусылар туған телен өйрәнә башлаған мәлдән үк - 1-се кластан башлап - телебеҙҙең фонетик стройындағы, лексикаһындағы, төрлө һүҙ төркөмдәрендәге, һөйләм төҙөлөшөндәге үҙенсәлектәрҙе рус теле менән сағыштырып аңлатыу бик уңайлы. Башланғыс кластарҙан уҡ орфографиянан башҡа телебеҙҙең орфоэпияһына иғтибарҙы арттырыу фарыз, юғиһә, балалар урта һәм юғары кластарҙа ла һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтә алмаясаҡ. Орфоэпик күнекмә-ләргә күберәк ваҡыт бүленһә, беҙҙең балалар "әүерелеү", "әүрәү", "йәберһетеү" кеүек ауырыраҡ әйтелешле һүҙҙәрҙе лә дөрөҫ әйтергә тиҙ өйрәнә, ә был шул уҡ рус балалары өсөн ауыр мәсьәлә.

**Туған телдә дөрөҫ яҙа белеүҙән башҡа, фекереңде дөрөҫ итеп әйтә белеү ҙә мөһим. Был психология принцибына тап килә: тыштағы эскә (аңға) инә, эстәге тышҡа сығарыла, йәғни, ҡысҡырып уҡылған, әйтелгән һөйләмдәр эске фекер программаһын хасил итә, ә анда формалашҡан фекерҙәр яҙыу йә иһә һөйләү аша үҙеңә һәм башҡаларға белдерелә. Был - оҙайлы процесс. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә башҡорт телен "шым" уҡыталар: уҡытыусы күберәк, уҡыусылар аҙыраҡ һөйләй. Совет осоро методикаһына ярашлы, бигерәк тә башланғыс кластарҙа күмәкләп, хор менән уҡыу алымы йыш ҡулланыла ине.**

- Ҡысҡырып уҡыуға килгәндә, мин шундай алым ҡуллана инем: мәҫәлән, шиғыр юлдарын үҙем ҡысҡырып уҡығанда минең менән бергә уҡыусыларға ла ҡысҡырып уҡырға ҡушам, унан һуң минән башҡа ғына ҡабатлап ҡысҡырып уҡыйҙар. Берәй уҡыусының янына килһәм, ул минең өсөн тағы ла көслөрәк тауыш менән уҡырға тейеш: йәнәһе, минең ҡолағым насар ишетә. Уҡыусыларҙан кемгәлер ҡысҡырып дөрөҫ уҡыу ауырыраҡ булһа, башҡаларға икенсе эш биреп, тексты унан уҡытыусы өҫтәле янында уҡыттырам.

Үҙемдең практиканан тағы бер миҫал. Мин уҡытҡан ҡала мәктәбендәге класта 6 рус балаһы бар ине. Мин тәүге дәрестә үк улар менән дә тик башҡортса һөйләшәсәгем тураһында әйттем. "Башҡорт һүҙҙәрен минең артымдан ҡабатларһығыҙ, ҡурҡмағыҙ, яңылышһағыҙ, төҙәтермен. Минең янымa килеп, ҡысҡырып әйтеп ҡабатлаһағыҙ, башҡортса һөйләшергә өйрәнерһегеҙ", - тимен быларға. Өйрәнделәр - дәрес һайын, өҫтәл эргәһенә килеп, бер һүҙ булһа ла әйтеп китәләр, уҡып-яҙып та күрһәтәләр. Иң үтемле алым - башҡорт һүҙҙәрен һәр даим русса әйтелешлеләре менән сағыштыра барыу: мәҫәлән, башҡортса - алтын, русса - алтЫн, батыр - батЫр, был - бЫл һ.б.

Беҙҙең башҡорт теле дәреслегендә теория беренсел түгел, тик ябайлаштырылған аңлатмалар ғына бирелә. Мәҫәлән, башҡорт теленең сингармонизмын аңлатыр өсөн тейешле өлгөләр биреп, уҡыусыларға ошоға ярашлы үҙаллы эштәр - күнегеүҙәр биреү ҙә етә. Ғөмүмән, әлеге дәреслекте башҡорт теле уҡытыусылары өсөн методик ҡулланма итеп ҡарарға кәрәк. Башҡорт теле уҡытыусыларының съезында таратырмын тигән инем - өмөттәрем аҡланманы - мине саҡырманылар.

**Мин бер күренешкә иғтибар иткәнем бар: радио һәм телетапшырыуҙарға саҡырылған ябай башҡорт кешеләре журналист биргән һорауҙарға телебеҙҙе ватыпҡырып тигәндәй, русса һүҙҙәрҙе ҡыҫтырып тороп яуап бирәләр. Улар ҙа бит урта мәктәптә башҡорт теленән күп йылдар дауамында һабаҡ алғандар. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?**

- Башҡорт телен теория менән алыштырған өсөн, һәр дәрестә тиерлек ҡағиҙәләр ятлаған өсөн. Хаталы уҡытҡан өсөн. Миҫалдар килтерә башлаһаң, һанап бөтөрлөк түгел. Бына береһе: кәм һөйләмде билдәһеҙ эйәле һөйләм, тип аңлаталар. Мин бая һиңә бер һөйләм әйттем: "Эште ваҡытында тамамлаһындар". Һин шундуҡ һораның: "Кемдәр?" - тип. Билдәләме, билдәһеҙме - әммә был һөйләмдең эйәһе юҡ та баһа! Ошондай дәреслектәрҙә хаталар булыуына артыҡ борсолоп бармайым, сөнки дәреслек - үҙе хата. Ә беҙҙең дәреслектең беренсел маҡсаты - балаларҙы фекерләргә өйрәтеү. Дәреслектең башынан аҙағына тиклем тәҡдим ителгән текстар буйынса уҡыусыларға тиҫтәләгән төрлө ғәмәли эштәр бирергә була. Миҫал өсөн Рәми Ғариповтың бер дүрт юллыҡ шиғырын килтерәм:

*"Дошмандың яҡшылығы -*
*Тоғро дошманлыҡ.*
*Дуҫтың хыянаты -*
*Мәңге хыянат".*

Фәлсәфәүи шиғыр, әммә уҡыусыларға уның асылын төшөндөрөп була. Иң элгәре әңгәмә ойошторола, һәр кем үҙ фекерен белдерә. Һәр кем ошо шиғырға үҙе теләгән исем бирә. Һуңынан 5-6 һөйләмдән торған инша яҙырға тәҡдим ителә. Шулай иткәндә уҡытыу тәрбиә менән ҡуша бара. Ошондай күнегеүҙәр балаларҙың фекерләү һәләте менән ҡуша ғәмәли телмәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

**Совет осоронда ла, 90-сы йылдарҙа ла дидактика һәм уҡытыу методикалары өлкәһендә новаторҙар хәрәкәте киң ҡолас алғайны. Хәҙер ҙә ижади эшләгән уҡытыусылар бар, әммә берҙәм программалар, ҡалыплашҡан, һөҙөмтәһе икеле булған методикалар педагогик ижад өсөн үтеп сығарлыҡ булмаған кәртәгә әйләнде...**

- Яңыса, новаторҙарса эшләргә өйрәтеүселәр ҡалманы.

**Йәш уҡытыусыларҙы вуздарҙа өйрәтмәйҙәрме ни?**

- Ә вуз уҡытыусыларын ижади эшләргә кем өйрәтә? Шәхсән үҙемдең методикаларҙы камиллаштырыу буйынса 53 йыллыҡ тәжрибәм бар. Әммә хәҙер минең методик ижадымды бар тип тә белмәйҙәр. Әле тәҡдим ителгән методика Сибайҙа, Силәбелә эшләгән сағымда хасил булды. Студенттарымды ла уға ярашлы уҡыттым. Уҡыусылар менән бик күп семинарҙар, конкурстар уҙғарҙым, уҡыусылар өсөн 6 тапҡыр олимпиада ойошторҙом. Ата-әсәләр менән дә эшләнек, киң билдәлелек тапҡан шәжәрә байрамдарын беҙ беренсе булып башланыҡ. Студенттарымды Башҡортостан ҡалаларына һәм райондарына практикаға йөрөттөм. Улар дәрестәрҙе мин тылҡыған методикаға ярашлы планлаштыра ине. Әйтергә кәрәк, ул саҡтарҙа Силәбе өлкәһендә йәшәгән башҡорт балалары туған телен Башҡортостанда уҡығандарҙан яҡшыраҡ үҙләштерә алды. Силәбе университетына дәүләт имтиханы комиссияһы рәйесе булып профессор М.В. Зәйнуллин килгәйне, ул беҙҙең эшебеҙгә бына ниндәй баһа бирҙе: "Студенттарығыҙ тел теорияһын ҡайһылай шәп үҙләштергән!" Ә эш теорияла түгел бит, уҡытыу методикаһында.

Мәктәптә теорияға ҡараған иң кәрәкле төшөнсәләр теҙмәһе ныҡ сикләнгән булырға тейеш: алфавитты, башҡорт өндәре, һүҙ төркөмдәре бүленешен, уларҙы асыҡлаусы һорауҙарҙы, һүҙҙәрҙең һөйләмдәрҙә бер-береһенә ниндәй формаларҙа бәйләнешен һ.б. белеү. Ошо төшөнсәләрҙең барыһын бергә туплаһаң, 50-60-тан да уҙмай. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең дәреслектә програмалар талап иткән барса темалар, барса төшөнсәләр бар, әммә улар, алдараҡ әйткәнемсә, уҡыусыларҙың башын ҡатырыуға ҡоролмаған. Ошо дәреслекте тәнҡит күҙлегенән ҡараусылар ҡайһы саҡта абсурд һығымталарға ла килеп ҡуя. Бына бер "эксперт" нимә тип яҙа: "Һеҙ башҡорт телендә род категорияһы юҡ тип яҙғанһығыҙ. Ә ул бар, енес тип атала". Әҙәм көлкөһө бит!

**Мин методик яҡтан тағы ла бер фактҡа иғтибар итер инем. Балалар туған телебеҙҙе халыҡ йырҙарын тыңлап, үҙҙәре йырлап өйрәнһә, яҡшыраҡ булмаҫмы?**

- Тап шулай. Мин, үҙебеҙҙең методикаға ярашлы, тел дәрестәрендә башҡорт көйҙәрен, халыҡ йырҙарын даими фон итеп алырға кәрәк, тимен. Бигерәк тә ҡурай моңдарына өҫтөнлөк биреү фарыз. Йырҙарыбыҙ, оҙон көйҙәребеҙ үҙенсәлекле, ул тик бер ритмға ғына ҡоролмаған. Телде моңдан айырыу мөмкин түгел. Унан һуң, беҙҙең оҙон көйҙәр кеше организмына, хис-тойғоларына, зиһененә ыңғай тәьҫир итә икән: медицина белеме булған йәш ғалимәләребеҙ ошо тема буйынса 3 кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған, тип ишеткәйнем. Халыҡ йырҙары - бер нимә менән дә алыштырғыһыҙ мәҙәни-рухи мираҫыбыҙ. Уларҙы балаларҙы ҡыҙыҡһындырыу, ылыҡтырыу маҡсатында бик һөҙөмтәле ҡулланып була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Күренекле ғалим, башҡорт теле методикаһы өлкәһенең маһир оҫтаһы Вәкил Хажиндың ғилми-методик ҡараштары педагогтарыбыҙҙың етди иғтибарына лайыҡтыр, тибеҙ. Уныңса, башҡорт теле уҡытыусылары - туған телебеҙ һаҡсылары, уны бар теүәллегендә йәш быуындарға тапшыра алһаҡ, халҡыбыҙ ҙа, республикабыҙ ҙа йәшәр һәм үҫер.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Күршеләр этикеты бер маҡсатты күҙ уңында тота - тирә-яҡтағыларға ҡамасауламаҫҡа. Был шуны аңлата: балалар күршеләрҙең тәҙрәһе алдында шауламаҫҡа, радио, телевизор йәки башҡа музыка ҡоралы артыҡ яңғыратмаҫҡа тейеш.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТӘМӘКЕ ТӨТӨНЛӨ ҺАУА...

## яман шешкә сәбәп

■ Стеналарға, йорт йыһаздарына, текстилгә һеңгән тәмәке төтөнө яман шешкә килтереүе ихтимал. Белгестәр раҫлауынса, үҙе сәләмәт йәшәү рәүеше алып барып та, тәмәке төтөнө менән һуларға мәжбүр булған кешенең ДНК-һы зарарлана һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефе арта. Беркли ҡалаһында урынлашҡан Милли лаборатория хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, тәмәке тартҡанда һауаға 4 мең тирәһе төрлө матдә бүленеп сыға, уларҙың күп өлөшө йыһаздарҙа, стенаға һеңә. Был токсик матдәләр концероген тәьҫиргә лә эйә. Азот һәм азот оксиды органик берләшмәләренән торған нитрозамин төркөмө бигерәк зыянлы. Улар ДНК молекулаһы менән берләшеп, яман шеш күҙәнәктәре үҫешен барлыҡҡа килтерә.

■ Диетологтар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, татлы ризыҡтар сәләмәтлеккә зыян килтермәй. Хатта йыш һәм күп итеп кәнфит ашаусыға ла йөрәк-ҡан тамырҙары сире, һимереү көйек хәүеф янамай, бында эш туҡланыуҙа ғына түгел, ти ғалимдар. Йәғни, татлы ризыҡ ашау һимереү хәүефе менән бәйле түгел, был турала тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың тән массаһы индексы, бил һәм май ҡатламы үлсәме күрһәткестәре һөйләй. Шулай уҡ уларҙың ҡан баҫымы, холестерин кимәле, инсулин резистентлығы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырыу хәүефе тыуҙырмаған.

■ Һалҡын тейгәндә халыҡ дауаһына өҫтөнлөк биреүселәр әйтеүенсә, эхинацея үҫемлеге экстракты иммунитетты нығытыуға ярҙам итә. Мәдисондағы Висконсин университеты ғалимдары эхинацея нигеҙендәге дарыуҙарҙы тикшергән һәм уларҙың һалҡын тейеүҙән дауалай алмауын асыҡлаған. Шулай ҙа эхинацея препараттарының ауырыуҙы профилактикалауҙа файҙаһы бар. Был тикшеренеүҙәрҙе үткәреүсе белгестәр раҫлауынса, был препараттарҙың күбеһе тикшереү үтмәй һәм аҙыҡҡа биологик өҫтәмә булып тора. Әйткәндәй, киңкен вируслы ауырыуҙар менән сирләп китеүселәр дарыуға, шул иҫәптән, эхинацея өҫтәмәләренә йылына уртаса 8 млрд доллар исраф итә. Дарыуханаларҙа үҙебеҙҙең илдә етештерелгән ябай эхинацея төнәтмәһе сит илдә етештерелгән билдәле брендтағы дарыуҙарҙан күпкә осһоҙораҡ тора. Барыһының да нигеҙендә эхинацея үҫемлеге ятҡанлыҡтан, уларҙың араһында айырма юҡ, ти белгестәр.

■ Йорт хайуандары кеше һаулығының торошона яҡшы тәьҫир итә, ти белгестәр. Ғалимдар йорт хайуандары ярҙамында стрестан ҡотолорға, хатта психиканы нығытып, иммунитетты ла яҡшыртырға мөмкин, тип дәлилләй. Медиктар фекеренсә, бесәйҙе бер нисә минут буйына һыйпау баш ауыртыуынан ҡотолдора. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә алынған статистик мәғлүмәттәргә ярашлы, өйҙәрендә эте йәки бесәйе булғандар уртаса биш йылға оҙағыраҡ йәшәй. Дөйөм алғанда, зоотерапия бөгөн күп кешеләргә сәләмәтлеген нығытырға булышлыҡ итә. Белгестәр әйтеүенсә, бесәй ауыртҡан урынды үҙе табып дауалау һәләтенә лә эйә.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ӘСӘ ҠАРЫНЫНДАҒЫ ӘҢГӘМӘ,

## йәки Ахирәт тормошона ышанаһыңмы?

**Гәзитебеҙҙең 23-сө һанындағы "Фәһем" рубрикаһы аҫтында "Әсә ҡарынындағы әңгәмә" тип аталған ғәйәт тә фәһемле хикәйәтте уҡып, ошо хаҡта үҙемдең фекерем менән дә бүлешмәк булдым. Был, әлбиттә, булған хәл түгел (әстәғфируллаһ!), әммә уйлыға уй һалырлыҡ...**



Ауырлы ҡатындың ҡарынында ике бәпес һөйләшә, имеш. Был игеҙәктәрҙең береһе - иманлы, икенсеһе - иманһыҙ. Иманһыҙы иманлыһынан: "Донъяға тыуғандан һуң ғүмер барлығына ышанаһыңмы?" - тип һорай. Иманлы бәпестең яҡты донъяға сыҡҡандан һуң ғүмер бар икәнлегенә, унда улар өсөн һәр төрлө һынауҙар буласағына ныҡ ышаныуы хаҡындағы һүҙҙәрен ишеткәс, тегеһе ҡыҙыу бәхәсләшергә тотона. "Был - йүләрлек, - ти ул. - Аҙаҡтан бер ниндәй ҙә ғүмерҙең булыуы мөмкин түгел. Ул ғүмерҙе үҙең күҙ алдына килтерәһеңме һуң?" "Тулыһынса күҙ алдына килтермәйем. Әммә унда яҡтылыҡ буласаҡ, һәм беҙ унда аяҡтарыбыҙ менән атлап йөрөй аласаҡбыҙ, тип ышанам". "Буш һүҙ. Үҙебеҙ йөрөй ҙә, ашай ҙа алмайбыҙ. Беҙҙе тик кендек туҡландыра. Беҙҙең ғүмер ҙә - кендек, башҡаһы юҡ..." "Ә мин бар тип ышанам. Тик ул ғүмер икенсерәк буласаҡ". "Тыңла әле, унан бит ошоғаса бер кем дә әйләнеп ҡайтмаған. Ғүмер, ғөмүмән, бына ошолай әйләнеп-тулғанып ятыуҙан, интегеүҙән һәм ҡараңғылыҡтан ғына тора, кендегебеҙ өҙөлөү менән, беҙҙең тормош тамамланып та ҡуя..."

Иманлы сабыйҙың бынын менән һис кенә лә килешергә иҫәбе юҡ: "Юҡ! Юҡ! Яҡты донъяға тыуғандан һуң беҙ әсәйҙе күрәсәкбеҙ, һәм ул беҙҙең хаҡта хәстәрләйәсәк!" "Әсәйҙе? Һин Әсәй барлығына ышанаһыңмы? Ҡайҙа һуң ул? Был - мәғәнәһеҙлек. Мин бер ниндәй ҙә әсәй күрмәнем, тимәк ул юҡ!.." "Мин һинең менән ризалаша алмайым, - ти иманлы бәпес, - ҡайһы ваҡыт уның йырлағанын ишетергә, беҙҙе һыйпағанын тойорға була. Ысын ғүмеребеҙ яҡты донъяға тыуғандан һуң ғына башланасаҡ..."

Күптәребеҙ инде аңлауыбыҙса, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, бында үҙебеҙҙең тормошобоҙҙағы хәл һүрәтләнеүе барыһы өсөн дә асыҡ. Күп кешеләрҙән: "Үлгәс, кеше мәңгелеккә юҡ була. Теге донъя (Ахирәт) әллә бар, әллә юҡ... Һис кенә лә ышанғы килмәй. Унан әле бер кем дә әйләнеп ҡайтмаған да баһа..." - тип фәлсәфәләүҙәренә ҡарата ишара итеп был әкиәттең уйлап сығарылған икәнлегенә төшөнөү ҡыйын түгел.

Әлеге "иманлы" бәпес тигәндән. "Иман" һүҙе ғәрәпсәнән "ышаныу" тигәнде аңлата (урыҫса - "вера"). "Иманлы кеше" тигәндә беҙ Аллаһ Тәғәләнең барлығына, берлегенә, Уның рәсүлдәренә, фәрештәләренә, Ҡиәмәт көнөндә ҡабаттан тереләсәгебеҙгә, Ахирәт тормошона, тәҡдиргә, уның яҡшыһы ла яманы ла тик бер Аллаһтан икәнлегенә ышанған кешене күҙ уңында тотабыҙ. Был аңлатма иман шарттары тип тә атала. Ҡөрьән аяттарына һәм Аллаһ рәсүле бәйғәмбәр Мөхәммәт (саллаллаһу

*ҠЫЛЫҒЫҢ НИНДӘЙ?*

# ҠАЛАЛАҒЫ КҮРШЕЛӘР МЕНӘН...

## аралашыу нисек бара?



**Ауылда йәшәүселәр бер-береһен яҡшы белә һәм ундағы күршеләр үҙ-ара мөнәсәбәттәрен бер яйға һалып, йылдар дауамында шул ҡағиҙәләрҙе үҙгәртмәйенсә көн итә. Шәхси йорттарҙа барған хәл-ваҡиғалар күршеләргә ҡамасау тыуҙырмай һәм уларҙы бимазаламай. Ә ҡаланың күп фатирлы йорттарында күрше йәшәүселәргә иһә был йәһәттән һаҡлыҡ менән эш итергә тура килә, сөнки йоҡа ғына стена күршеләр тыныслығын боҙорға мөмкин. Шуға күрә ҡайһы бер этикет нормалары тураһында онотмау бер йортта һәм подъезда йәшәүселәр менән матур мөнәсәбәт һаҡларға ярҙам итәсәк.**

Күршеләр этикеты бер маҡсатты күҙ уңында тота - тирә-яҡтағыларға ҡамасауламаҫҡа. Был шуны аңлата: балалар күршеләрҙең тәҙрәһе алдында шауламаҫҡа, үҙегеҙ булмаған фатир эсендәге этегеҙ бер туҡтауһыҙ оламаҫҡа, радио, телевизор йәки башҡа музыка ҡоралы артыҡ яңғыратмаҫҡа тейеш. Ошо һәм башҡа ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ, әммә мөһим аспекттарҙы күҙ уңында тотоп йәшәгәндә күршеләр менән бер ҡасан да низағ булмаясаҡ.

Әгәр ҙә балағыҙ музыка ҡоралында уйнарға өйрәнә икән, стенағыҙға келәм элеп ҡуйыу тауышты күпкә кәметәсәк. Закон буйынса 23.00 сәғәткә тиклем фатирҙарҙа ремонт эштәре, музыка уйнатыу һәм башҡа төрлө тауыш сығанаҡтары барлыҡҡа килтергән эштәр һәм шөғөлдәр менән булырға рөхсәт ителә. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, күршеләрегеҙҙе буласаҡ ремонт һәм байрам тантанаһы тураһында алдан иҫкәртеүегеҙ үҙ-ара татыулыҡты һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

Ҡайһы бер күршеләр бигерәк әрһеҙ булыусан. Улар ураған һайын нимәлер һорап килә, төрлө үтенес менән мөрәжәғәт итә. Әлбиттә, ҡайһы бер осраҡта күршенең хәленә инеп, уның ниндәйҙер мөһим үтенесен кире ҡағыу дөрөҫ булмаҫ. Ләкин бындай һорау-үтенестәр көн һайын тиерлек ҡабатлана башлаһа, мөмкин булған сиктә үтһә, күрше менән дуҫлыҡты бер аҙ һыуытырға ла була. Бөтә нәмәлә лә, шулай уҡ күршеләр мөнәсәбәттә лә, саманы белеү мотлаҡ.

Күршегеҙгә ниндәйҙер йомош менән инергә тура килһә, уның саҡырыуы булмаһа, иң яҡшыһы - ишек төбөнән ары үтмәҫкә. Әгәр ҙә күршегеҙ менән урамда осраҡлы

ғәләйһи үә-сәлләм) хәҙистәренә нигеҙләнеп бирелгән ул. Ислам дине фәлсәфәләүгә түгел, ә фәҡәт ышаныуға ҡоролған. Барыбыҙ ҙа белеүебеҙсә, күҙебеҙгә күренгән һәр нәмәгә ышаныу ауыр түгел. Ә бына йәшерен, йәғни күҙгә күренмәгән нәмәгә ышаныу бәхетенән бик күптәр мәхрүм. Изге Ҡөрьән Кәримдәге иң ҙур Әл-Бәҡарә сүрәһе "...был китап (Ҡөрьән), һис шикһеҙ, тәҡүәлеләр өсөн, ғәйеп (күҙгә күренмәгән) нәмәләргә ышаныусылар, намаҙға тороусылар өсөн ҡулланма..." тип башлана. Баштараҡ иҫкә алып киткән нәмәләрҙе - Аллаһ Тәғәләне, Уның расулдәрен, фәрештәләрен, Ҡийәмәт көнөн, һәм башҡа иман шарттарының береһен дә беҙ күрмәйбеҙ, әммә беҙ - үҙебеҙҙе мосолман тип һанаған кешеләр ана шуларҙың булыуына һис кенә лә икеләнеүһеҙ ышанырға бурыслыбыҙ. Сөнки уларға ышанмау - ололарҙан оло гонаһ ("ышанмау" - ғәрәпсәнән "кәфәра" тип тәржемеләнә, ә ышанмаған кеше - кәфир).

Бөгөнгө һүҙем ана шул Ахирәт (үлгәндән һуң буласаҡ мәңгелек тормош) хаҡында. Ҡөрьән Кәримдә Аллаһ Тәғәлә "Ахирәткә ышанмаусы кешеләргә беҙ уларҙың эштәрен зиннәтләп күрһәттек, һәм улар һуҡыр хәлдә ҡаңғырып йөрөйҙәр, уларҙы Ахирәттә оло ғазап көтә, һәм улар иң ҙур зыян күреүселәр", тигән мәғәнәле аяттар килтерә (Ән-Нәмл сүрәһе, 4,5 аяттар). Ышанмаусы кешеләрҙе иҫкәртеүсе башҡа аяттар ҙа күп. Ә Ҡөрьәндең һәр бер һүҙе Аллаһтыҡы икәнлеге хаҡында онотмайыҡ.

"Оло ғазап" тигәндән, әлбиттә, бында Йәһәннәм ғазабы - тамуҡ утында яныу күҙ уңында тотола икәнен белеү кәрәк. Әлеге "Әсә ҡарынындағы әңгәмә"не уйлап сығарған авторҙың тел төбөнән аңлауыбыҙса, унда һәр мосолман кешеһе яҡшы белергә тейешле "Иман", "Ахирәт" төшөнсәләре хаҡында ошо мөһимдәрҙән мөһим мәсьәлә күтәрелә лә инде. Иман килтергән кешеләр өсөн Ахирәттә әҙерләнгән мәңгелек Йәннәт һәм иманһыҙ килеш был донъянан киткәндәр дусар ителгән Йәһәннәм хаҡында яҡташтарыбыҙҙың иҫенә төшөрә был әңгәмә...

Ошо һорауға ла иғтибар итәйек әле, ҡәҙерле дуҫтар: мосолмандар ни өсөн көнөнә биш намаҙ уҡый, Рамаҙан айында ураҙа тота, мохтаждарға саҙаҡа бирә, хәленән килгәндәр ғүмерендә бер мәртәбә булһа ла Мәккә ҡалаһына барып, Әл-Харам мәсетенә хаж ҡыла? Иман килтергән был кешеләр үҙҙәренең Ахирәт тормошон хәстәрләү ниәтендә Аллаһ Тәғәлә тарафынан әҙәм балаларына бойоролған бына ошо ғибәҙәттәрҙе үтәргә тырыша ла инде.

Хаж ҡылыуҙы ғына алып ҡарайыҡ. Ана шул оло сәфәргә тәүәккәлләгән мосолмандар башҡалар араһында "хажи" исемен тағып, әллә кем булып йөрөү өсөн түгел, ә фәҡәт үҙҙәренең мәңгелек тормошон ҡайғыртып ғүмер иткән кешеләр (быйыл минең үҙемә лә динебеҙҙең ошо бишенсе терәген үтәү бәхете тейгәйне, әлхәмдүлиллаһ). Ҙур ғына сумма (һәр кешегә ярты миллион һумдан ашыуыраҡ) аҡса сарыф иткән был кешеләр тураһында "аҡсаларын ҡайҙа ҡуйырға белмәй", унда киткәндәрҙер, тип уйлаусылар ҙа табылыр. Әммә... шунда мин танышҡан мосолмандар ифрат та ябай кешеләр ине. Ғаиләһе менән килгән Нефтекама егете Рәфис - "Камаз" водителе, Әбйәлил егете Али - аяҡ кейеме йүнәтеүсе, Өфөнән Нәзиә апай Бикбова - хаҡлы ялдағы уҡытыусы, һ.б. Ярайһы ғына ауыр һынауҙар үтеп, Хаж ғәмәлдәрен үтәргә килгән шул мосафирҙарҙың аралашыуы ла, башлыса, мәңгелек тормош хаҡында барыуына иғтибар иттем. Һәр ритуалды дөрөҫ, теүәл генә итеп үтәргә тырышып йөрөгән хажиҙар үҙ-ара һөйләшкәндә "Ахирәттә кәрәк буласаҡ бит" тигән һымағыраҡ һүҙҙәр ҡулланалар ине.

Минең менән ҡунаҡханала бер бүлмәлә йәшәгән Ринат исемле егет (Нефтекама ҡалаһынан) үҙе бер нисә йыл элек хаж ҡылған булған икән. Ә үткән йыл унын һикһән йәштән үткән әсәһен инсульт һуҡҡас, ана шул ғәзизенең үтенесе буйынса (әсәһе урынына хаж ҡылырға) тағы ла килгән ине. Инде ныҡ ҡына ҡартайған сирле әсәһенең ана шул мөһим ғибәҙәте үтәлеүен хәстәрләп, улы үҙенә машинаға тип йыйған аҡсаһын бына ошо изге эшкә тотонған (Аллаһ Тәғәлә уларҙың хажын ҡабул итһен). Шулай уҡ, элегерәк Мәккә ҡалаһына хаж, ғүмрә ҡылған күп кенә ҡәләмдәштәрҙе лә миҫал итеп килтерергә була. Лира Яҡшыбаева, Гөлфиә Янбаева, Ғәҙилә Бүләкова, Фәрзәнә Аҡбулатова һәм башҡа әҙиптәребеҙ ҙә бына ошо ғибәҙәт төрөн исем өсөн генә үтәмәгән бит.

Әйе, Ҡиәмәт көн (Ахыры заман) етеп, барыбыҙ ҙа Аллаһ Тәғәлә тарафынан ҡабаттан терелтелгәс, мәңгелек тормошта һәр кемдең ахырғы урыны билдәләнә. Тереклектә ҡылған һәм ҡылмаған эштәргә, ғибәҙәттәргә ҡарап. Ә ахырғы урын - ни бары икәү: береһе - Йәннәт (ожмах), икенсеһе - Йәһәннәм (тамуҡ). Һәр береһе Ислам дине рухында бала саҡтан тәрбиәләнеп үҫкән, хаҡ мосолман булып ғүмер иткән боронғо ата-бабаларыбыҙ был хаҡта бик яҡшы белгән. Ахирәт хаҡында һүҙ сыҡҡанда уны атайым мәрхүм "ысын донъя" тип тә атай торғайны. Ислам диненең биш терәген, шул иҫәптән, намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, зәкәт түләү, хатта ҡайһы берҙәре Мәккәгә хаж ҡылыу ғибәҙәтен дә хәлдәренән килгәнсә үтәргә тырышҡан беҙҙең олатай-өләсәйҙәребеҙ...

Тереклектә "донъя рәхәтен" татып, шат, бәхетле ғүмер итеүҙе динебеҙ тыймай. Хәлеңдән килә икән, әйҙә, байлыҡ һәм муллыҡта йәшә. Тик һәммәбеҙ ҙә мәңгелек киләсәгебеҙҙе хәстәрләп, үҙебеҙгә бер генә мәртәбә бирелгән ғүмеребеҙҙе бушҡа әрәм итмәй, әҙәм балалары өсөн мотлаҡ ҡушылған ғибәҙәттәрҙе үтәргә онотмаҫҡа тейешлебеҙ (Хаж ҡылыу һәм зәкәт биреү матди яҡтан хәленән килгәндәр өсөн генә булһа, намаҙ, ураҙалар бар кеше өсөн мотлаҡ). Социализм дәүерендә күптәребеҙҙе мәктәптәрҙә динһеҙлек рухында тәрбиәләргә тырыштылар. Шуға һылтанып, Аллаһ Тәғәлә алдында яуаптан ҡотолоп булыр әле тип, үҙебеҙҙе алдаштырып ғүмер итмәйек, тимәксе инем. Беребеҙ ҙә был донъяла мәңгелеккә ҡалмайбыҙ. Шуға күрә, әлегә иҫән сағыбыҙҙа Ахирәтебеҙҙе хәстәрләп өлгөрәйек, үҙебеҙгә үҙебеҙ ғәҙелһеҙ булмайыҡсы, ҡәҙерле милләттәштәрем!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

рәүештә осрашһағыҙ, унын сумкаһында нимә ятыуын ҡарарға ынтылырға, ниндәй әйберҙе күпмегә һатып алыуы тураһындағы мәғлүмәтте һорарға тырышмағыҙ - был әҙәпһеҙлек. Әгәр ҙә кәрәк һаналға, ул барыһын да үҙе һөйләп бирер. Шулай уҡ теге йәки был күршегеҙҙең күпме эш хаҡы алыуы, балаларының мәктәптәге хәлдәре, уларҙың өйөндәге хәл-ваҡиғаларҙы башҡа күршеләр менән тикшермәгеҙ, ғәйбәт һөйләп йөрөү бер кемде лә биҙәмәй.

Күршеләргә килеүселәрҙе ишекте ҡыҫып ҡарап тороу бөтөнләй мәҙәниәтһеҙлек.

Әгәр ҙә беренсе ҡаттан өҫтә йәшәйһегеҙ икән, иҙәнгә ныҡ итеп баҫып йөрөү, балаларға иҙәнгә (йәки күршеләр яғындағы стенаға) туп һуғырға рөхсәт итеү, диван йәки башҡа мебелде дөбөр-шатыр шылдырыу һәм башҡалар аҫтағы күршеләрегеҙҙең тормошон "тамуҡ" итәсәк. Ошо хаҡта һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоуығыҙ үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәр һаҡларға булышлыҡ итер.

Фатирығыҙҙағы бер бүлмәне ҡуртымға алып йәшәүселәр ҙә тыныс тормошҡа хоҡуҡлы. Бүлмә өсөн түләгән осорҙа, бүлмә - унын биләмәһе, шуға күрә уға ишек шаҡымайынса инергә, унын шәхси тормошо менән артыҡ ҡыҙыҡһынырға ярамай.

Шул уҡ ваҡытта фатирҙа тороусының да бурыстары бар. Мәҫәлән, унын будильнигының тауышы бөтәһен дә уятырлыҡ булмаҫҡа, өй хужалары алдында ярымяланғас йөрөмәҫкә, әйберҙәрен фатир буйлап ташламаҫҡа тейеш. Һорауһыҙ фатир хужаларының әйберенә тейеү, уларҙың аҙыҡ-түлеген ашау, ванналағы әйберҙәр менән ҡулланыу бөтөнләй ярамаған ҡылыҡ. Был ҡағиҙәләр тураһында барыһы ла белгән кеүек, ләкин йәшәү барышында төрлө ҡытыршылыҡтар тыуырға мөмкин. Шуға күрә фатирға индергәндә бөтә нескәлектәрҙе лә һөйләшеп-аңлашып эш итеү фарыз.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

## Аҙ ҡанлылыҡ

Яны емеш-еләк, йәшелсә өлгөрөп еткән мәлдә бер үк күләмдә сөгөлдөр, кишер һәм әсе торма (редька) һуттарын бергә ҡушып болғатырға һәм ҡара төҫтәге шешәгә ҡойоп, нығытып ябырға. Ошо шешәне ҡамырға урап, духовкала 3 сәғәт тоторға. Көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаны оҙаҡ ҡына дауам итергә.

## Сөйәл

Йәй ойоҡ киймәйенсә күп йөрөйһөң, сөйәлдәр сыға. Уларҙан ҡотолоу өсөн кукуруз, зәйтүн майҙарын ҡулланығыҙ. Был майҙар тирене лә йомшарта. Төнөн аяҡҡа һөртөп йәки йылы туҡымаға һеңдереп кейәһең дә, полиэтилен пакет менән ябаһың, унын өҫтөнән йылы ойоҡбаш кейәһең. Иртәнсәк аяҡты һабынлы һыу менән йыуырға, сөйәлде ҡуптарып төшөрөргә. Сөйәлгә лимон киҫәге йәбештереү ҙә файҙа бирә.

## Тештәр

Тештәрҙең һыҙлауына үҙебеҙ ғәйепле. Теш араһында аҙыҡ ҡалдыҡтары ҡалһа, һеләгәйҙәге ирегән эзбиз менән тешкә таш булып ултыра. Ә таш уртты йәрәхәтләй, һыҙлау барлыҡҡа килә. Сара күрмәһәң, теш һелкенеп, төшөүе лә ихтимал. Күп кеше теше менән сәтләүек, өрөк, слива һөйәктәрен вата. Һөҙөмтәлә тештәге эмаль сатнай һәм кариес сығанағына әйләнә. Ҡаты әйберҙәрҙе йыш тешләү ҡан тамырҙарын ҡыҫа һәм тештәр туҡланыуҙан мәхрүм була. Туҡланыуҙа тәм-том, күмәстәр булыуы ла тештәргә зарарлы, бауыр, ашҡаҙан, эсәктәр эшмәкәрлеген дә боҙа. Төрлө йәшелсә, һөт ризыҡтары гел рационығыҙҙа булһын. Тештәр өсөн йомортҡа һарыһындағы Д витамины, помидорҙағы С витамины файҙалы.

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Һаҡ, суҡ, кескәй ябалаҡ

**(Воробьиный сыч)**



Иң бәләкәй ябалаҡ. Ҙур, ялпаҡ башлы. "Йөҙ"ө ҡара "битлек" менән ҡаймаланған, кәүҙәһенең өҫкө яғы көрән, аҡ таптар төшкән, ҡойроғонда ла аҡһыл һыҙаттары бар, ә кәүҙәһенең аҫҡы яғы иһә, киреһенсә, аҡһыл һәм арҡыры ҡара һыҙаттар менән биҙәлгән. Күҙҙәре - һары. Еңел генә оса. Ултырған сағында ҡойроғон өҫкә сөйөп-сөйөп ала. Ата ҡоштоң саҡырыуы - "фью, фью" йәки "тью, тью".

Кәүҙәһе бәләкәй булғанға күрә, ошо уҡ территорияла йәшәүсе һупылдаҡ ябалаҡтан еңел айырылып тора. Йоҡосан ябалаҡтан иһә шуныһы менән айырыла: "ҡолаҡ"тары, буй һыҙаттары юҡ.

Европаның көньяғы, урманлы урта зонаһында. Башҡортостанда урманлы-таулы ерҙә оя ҡора, башлыса Урал алдында йәшәй, Урал аръяғында күренгәне юҡ. Һирәк осрай торған ҡош. Өфө платоһында, республиканың төньяҡ-көнсығыш зонаһында, шулай уҡ Башҡортостандың үҙәгендә урынлашҡан райондарҙа даими йәшәй. Тауышына ҡарағанда, ул Шүлгәнташ мәмерйәһе янындағы урмандарҙа ла күп. М. Баянов кескәй ябалаҡты ныҡ яҡындан күҙәтеү бәхетенә эйә, был хәл Нуриман районы Тирәкле ауылы янындараҡ була. Ғалим шыршы аҫтында йоҡлап ятҡанда таң алдынан ғына үҙенә яҡын ултырған кескәй ябалаҡты күрә.

Бейек олонло ағаслы урмандарҙы, айырыуса шыршылар күп үҫкәнен ярата. Ағас олонондағы иҫке ояларға урынлаша. Төп ризығы булып ҡыр һәм урман сысҡаны тора. Вағыраҡ ҡоштарға ла һунар итә. Еңел оса, үләнгә лә, ағастарға ла ҡуна. Табышын тотошлайынса йотмай, сысҡандарҙың, суҡып, тиреһен һыҙыра, ҡоштарҙың ҡаурыйын таҙарта. Шунан ғына соҡоп ашай. Таң менән, шулай уҡ эңерҙә бигерәк әүҙем. Көндөҙ ҙә тик ултырмай. Көндөҙ һунар итеүе лә билдәле. Ырымбур өлкәһендә ҡышлап та ҡала.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**



## 11 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.40 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.40 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "От ненависти до любви". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 О чем молчат Памятники. [12+]**
**20.45 Д/с "Крылья армии. История военно-транспортной авиации". [16+]**
**22.00, 2.15 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Т/с "Умник". [16+]**
**0.45 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**2.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 12 АВГУСТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости.
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]**
**11.00 "Из жизни доктора". [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Д/с "Большой скачок". [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 "Занимательная биология". [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Т/с "Умник". [16+]**
**0.45 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 13 АВГУСТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости.
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]**
**11.00, 2.15 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 "Атайсал". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Д/с "Кто нас нарисовал". [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 "Асыш". [6+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Т/с "Умник". [16+]**
**0.45 Спектакль "Наследство". [12+]**
**2.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 14 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.00 Т/с "Шаповалов". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Профессионалы. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Д/с "Большой скачок". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Зверские заблуждения". [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Т/с "Умник". [16+]**
**0.45 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 15 АВГУСТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка-7". [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.45 Т/с Премьера. "Шерлок и дочь". [16+]
23.35, 1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.40 Х/ф "Сломанные судьбы". [12+]
3.15 Х/ф "Сюрприз для любимого". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Асыш". [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15, 2.45 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Т/с "Умник". [16+]**
**0.45 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.00 Телецентр.**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 16 АВГУСТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Цой - "Кино". [16+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Властелины неба". Ко Дню Военно-воздушных сил". [12+]
13.25 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
14.05 Х/ф "Испытательный срок". К 90-летию со дня рождения Олега Табакова". [12+]
16.00, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Шансон года". [12+]
21.00 "Время".
23.25 Х/ф "Аниматор". К 80-летию Екатерины Васильевой". [16+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Чужой ребёнок". [16+]
0.40 Х/ф "Хрустальное счастье". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [12+]**
**9.00 "Весело живем!" [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Зерно. [6+]**
**11.15 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30, 23.15, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Х/ф "Время женщин". [16+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 История одного села. [12+]**
**19.15, 3.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Т/с "Умник". [16+]**
**1.30 Спектакль "Руди - never off". [12+]**
**4.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 "Простые истории: жить, работать, любить". [12+]**

## 17 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/с "MONEYпуляторы. "От звонка до звонка". [16+]
13.25 Х/ф "Гори, гори, моя звезда". К 90-летию со дня рождения Олега Табакова". [0+]
15.10 Х/ф "Человек с бульвара Капуцинов". [12+]
17.05 Д/ф Премьера. "Достояние республики". К 90-летию со дня рождения Олега Табакова". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Перепой звезду". Финал. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.20, 2.45 Х/ф "Самая любимая". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Х/ф "Блестящей жизни лепесток". [12+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Династия чести. [12+]**
**8.00 Образцовая башкирская семья. [12+]**
**8.15 "Легенды Урала". [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 "Весело живем!" [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 Тирмәкәй. [6+]**
**11.00 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.15 "Беседка". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Занимательная биология". [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Спектакль "Наследство". [12+]**
**17.30 Х/ф "Смайлик". [16+]**
**19.00 Формула здоровья. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Гульсины Мухамадееевой. [12+]**
**0.45 Т/с "Умник". [16+]**
**2.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**4.30 Письма солдатам. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Август (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (17) дүшәмбе | 3:15 | 5:44 | 13:30 | 18:32 | 20:57 | 23:27 |
| 12 (18) шишәмбе | 3:16 | 5:46 | 13:30 | 18:30 | 20:55 | 23:26 |
| 13 (19) шаршамбы | 3:17 | 5:48 | 13:30 | 18:29 | 20:53 | 23:24 |
| 14 (20) кесе йома | 3:17 | 5:50 | 13:30 | 18:27 | 20:51 | 23:23 |
| 15 (21) йома | 3:18 | 5:52 | 13:30 | 18:26 | 20:49 | 23:22 |
| 16 (22) шәмбе | 3:22 | 5:54 | 13:30 | 18:24 | 20:46 | 23:17 |
| 17 (23) йәкшәмбе | 3:26 | 5:55 | 13:30 | 18:23 | 20:44 | 23:13 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✔ Әлеге ваҡытта планетала барлығы 476 миллион кеше - ерле халыҡтар иҫәбендә, улар 90 илдә йәшәй. Рәсәйҙә 190-дан ашыу төрлө милләт вәкиле йәшәй, шуларҙың 100-гә яҡыны - ерле халыҡ.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 9 АВГУСТ - ДОНЪЯ ЕРЛЕ ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ ХАЛЫҠ-АРА КӨНӨ

**Был иҫтәлекле дата 1994 йылдан алып Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан булдырылған. Сөнки тап ошо көндә 1992 йылда беренсе тапҡыр Ерле халыҡтар буйынса эш төркөмөнөң беренсе кәңәшмәһе уҙғарыла.**

Әлеге ваҡытта планетала барлығы 476 миллион кеше - ерле халыҡтар иҫәбендә, улар 90 илдә йәшәй һәм уларҙың теле, мәҙәниәттәре күп төрлө. Рәсәйҙә 190-дан ашыу төрлө милләт вәкиле йәшәй, шуларҙың 100-гә яҡыны - ерле халыҡ. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: күптән түгел илдә ете халыҡтың һаны миллиондан ашыу булһа, 2023 йылғы статистика мәғлүмәттәре буйынса ундайҙар алтау булып ҡалған.

Башватҡыста Рәсәй территорияһында йәшәгән ерле халыҡтарҙы табырға тәҡдим итәбеҙ.






Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Эскадра. Пластмасса. Арпа. Патриот. Ҡаптал. Сыйырсыҡ. Апсо. Шаршамбы. Ултырғыс. Нотариус. Кремний. Трактор. Рами. Арыҫлан. Нуакшот. Сир. Йүшә. Парашют. Аристократ. Мәнфәғәт. Атан. Имән. Йәтсә. Төләк. Йәйә. Абруй. Сәсә. Сәңгелдәк. Яҡшат. Әпше.

**Вертикаль буйынса:** Ишәк. Транспарант. Европа. Аят. Аҡшам. Клапан. Ирис. Помпа. Статистика. Алтын. Бысраҡ. Экскурсовод. Канау. Йогурт. Онагр. Аманат.Тауис. Ләлә. Соус. Мейес. Араҡы. Трамвай. Кеше. Үлән. Ыҙғыш. Рюрик. Әтмәкәй. Тылмас. Инәкә. Ҡасар. Негр. Тәкә.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ

## УҠЫТЫУСЫБЫҘ ҠАТНАША

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы һәм "Рәсәй" телеканалы "Класс темаһы!" телешоуының яңы миҙгеленә ҡатнашыусыларҙы һайлап алды.** Башҡортостандан "Класс темаһы!" телешоуының яңы миҙгелендә Өфө ҡалаһы "Яңы мәктәп" белем биреү үҙәгенең тарих уҡытыусыһы Юлиә Садиҡова ҡатнаша. Рәсәй Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, быйыл конкурсҡа педагогтарҙан 6720 ғариза килгән. Иң йәш ҡатнашыусыға - 18, ә иң өлкәненә 76 йәш булған. Әүҙем төбәктәр иҫәбендә - Краснодар крайы, Новосибирск өлкәһе һәм Санкт-Петербург ҡалаһы. Конкурста тарих, география, физика, химия, биология, математика, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ҡатнашҡан. Уларға үҙ фәне буйынса тест үткән һәм видеовизитка әҙерләгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, телешоу Президент Владимир Путин ҡушыуы буйынса ойоштоpола. Маҡсаты - уҡыусыларҙы дәртләндерергә һәләтле оҫта педагогтарҙы асыҡлау.

## ШМИДТА -МӘКТӘП!

**Тиҙҙән Өфө эргәһендә Шмидт ауылының Гудвилл Парк кварталында яңы мәктәп асыла.**

Уҙған ял көндәрендә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов, республиканың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов, торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты рәйесе Илшат Сәйетов һәм мәғариф министры урынбаҫары Филүс Миңәзев төҙөлөш эштәре барған объектта булды, тип хәбәр итте Өфө районы башлығы Николай Ельников. Күсмә кәңәшмәлә ҡатнашыусылар төҙөлөштө тамамлау ваҡытына һәм эштәрҙең сифатына ҡағылышлы мәсьәләләрҙе тикшерҙе. Николай Ельников һүҙҙәренсә, заманса белем биреү инфраструктураһы - балаларыбыҙ өсөн сифатлы белем алыу өсөн нигеҙ. Яңы мәктәп район үҫешенә ҙур өлөш индерәсәк. "Төҙөлөп ятҡан мәктәп 640 уҡыусыға иҫәпләнгән һәм 160 урынлыҡ балалар баҡсаһы менән берләштерелгән. Ошо заманса белем биреү комплексында балаларҙың төплө белем алыуҙан тыш, төрлө йүнәлештәрҙә лә үҫешеү мөмкинлеге бар", - тип яҙа район башлығы социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

## ДАУАХАНАЛАРҘЫ ХӘСТӘРЛӘП...

**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Өфө ҡалаһында урынлашҡан һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын яңыртыу буйынса төбәк программаһын тормошҡа ашырыу тикшерелде. 2025 йылға пландар тураһында республиканың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Роберт Иштуҡов хәбәр итте.**

Программа сиктәрендә 2025 йылда алты медицина ойошмаһының дөйөм суммаһы 195 миллион һумлыҡ һигеҙ бинаһын ремонтлау күҙаллана. Мәҫәлән, 8-се ҡала клиник дауаханаһының 2-се поликлиника бүлексәһендә һәм Ашығыс медицина ярҙамы клиник дауаханаһының 2-се поликлиника бүлексәһендә комплекслы капиталь ремонт бара. Республика клиник наркодиспансерының өс стационарында һәм Республика клиник инфекцион дауаханаһы стационарында - һайлап капиталь ремонт башҡарыла. Тағы ла ике бинала - 50-се поликлиникала һәм 18-се Ҡала клиник дауаханаһында ауыр ҡоралдар ҡуйыу өсөн биналар әҙерләнә. Роберт Иштуҡов хәбәр итеүенсә, модернизациялау программаһы буйынса 2025 йылда Өфөнөң һаулыҡ һаҡлау учреждениелары 78 берәмек ҡорамал, 1 370 берәмек мебель һәм 427 берәмек оргтехника аласаҡ. "Медицина ойошмаларын яңыртыу - ул капиталь ремонт ҡына түгел, ә табиптарҙың һәм пациенттарҙың уңайлылығына яңы ҡараш", - тине ул. Республикала, шул иҫәптән Өфөлә, беренсел звеноны ремонтлау 2024 йылда Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министрлығы раҫлаған өлкәндәр поликлиникалары берҙәм дизайн-проектына ярашлы алып барыла. "Федераль программа сиктәрендә ауыл медицина учреждениеларын тәртипкә килтерәбеҙ, бер юлы алты поликлиника төҙөйбөҙ. Әммә Өфө бер программаға ла инмәне, шуға күрә беҙ республика программаһын раҫланыҡ. Ул 2030 йылға тиклем иҫәпләнгән, был ваҡытҡа беҙ аныҡ файҙа алырға тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

**Ғаиләлә атай абруйының йәш быуынды тәрбиәләүҙә ни ҡәҙәр мөһим роль уйнауы һәммәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Атай хәстәрен, яуаплылығын тойоп үҫкән балаларҙың киләсәге лә өмөтлө, ышаныслы. Бәхеткә күрә, һуңғы йылдарҙа республикала ғаилә ҡиммәттәрен барлап, быуын-ара бәйләнештәрҙе нығытыуға, ир-егеттең абруйын үҫтереүгә айырата ҙур иғтибар бүленә. Был йәһәттән бигерәк тә Башҡортостандың "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһының эшмәкәрлеге оло баһаға лайыҡ. Мәҫәлән, яңыраҡ Белорет районының Ноҡат ауылы янында үткән йүкәнән батман яһау буйынса тәжрибә уртаҡлашыу ҙа иң элек ир-аттарыбыҙҙың һиммәтен арттырыуға, атай менән уландар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡынайтыуға йүнәлтелгән бит. Әйткәндәй, бер йыл элек атай-улдар ошонда түмәр умарталар яһарға өйрәнгәйне.**

# АТАЙҘАР ҺӘМ УЛАНДАР...

## яңы кәсепкә өйрәнде

Тәүҙә "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ағзалары Манышты ауылындағы Йәшлек шишмәһен тәртипкә килтерҙе. Ҡаянан бәреп сыҡҡан был сихәтле инеш 1985 йылдан уҡ билдәле, әммә ваҡыт үтеү менән ул быуылып ҡалған. Өмәнән һуң һыу юлы ҡайтанан тергеҙелеп, урындағы халыҡты саф һыуы менән һөйөндөрҙө. Бынан ике йыл элек ойошма ағзалары Рәүәт эргәһендәге Атай шишмәһен дә тәртипкә килтергәйне. Хәҙер ул күптәрҙең яратҡан ял итеү урынына әйләнгән.

Ата-бабаларының юлын ҡыуып, боронғо кәсеп-һөнәрҙәрҙе тергеҙгән дарманлы ир-егеттәребеҙҙең береһе Азамат Заһитуллин етәкселегендәге йүкәнән батман яһау буйынса оҫталыҡ дәресендә уландары менән 15 атай ҡатнашты. Оҫтаның төбәктәге иң ҙур түмәр-солоҡ умартасылығына республиканың төрлө тарафынан алты тиҫтәнән ашыу кеше йыйылды. Азамат Вәхит улы әйтеүенсә, батман - ул йүкәнән йә уҫаҡтан эшләнгән тәпәндән бейегерәк ағас һауыт, унда төрлө аҙыҡ-түлек һаҡланған. Оҫталыҡ дәресендә ҡатнашҡандарҙың барыһы ла үҙ ҡулдары менән ошо боронғо көнкүреш әйберен эшләп өйрәнеү мөмкинлегенә эйә ине.



- Батман эшләү оһоллоҡ, сабырлыҡ талап итә, әҙерлек эштәре менән был процесс 3-4 айға ҡәҙәр һуҙыла. Ғөмүмән, ҡул эштәре - бик шәп кәсеп төрө ул, ошо оҫталыҡ яҡшы килем килтерергә лә мөмкин. Шуға ла уландарға һөнәр өйрәтеү - һәр атайҙың изге бурысы. Улым Айтуғанға 23 йәш, ул Өфө фән һәм технологиялар университетын тамамлаған йәш белгес. Быйыл яҙғыһын унның менән ағас башында, 5 метр бейеклектә, солоҡ эшләнек. Улымдың ҡул эштәре, боронғо кәсеп төрҙәре менән ҡыҙыҡһыныуы минең өсөн айырата һөйөнөслө, - ти Азамат Заһитуллин.

Эш тәртибе йәһәтенән күрһәтмәләр бирелгәндән һуң атай-улдар, ниһайәт, батман яһарға тотондо. Әлбиттә, эш еңелдән түгел ине, балта, ҡасау, тишкес кеүек эш ҡоралдары көн оҙоно ҡулдан төшмәне. Кемдер ағасты боҙоп, эшен яңынан башланы. Батмандар кискә генә әҙер булды. Һәр улан атаһы менән эшләгән ағас һауыт янында ғорур йылмайып баҫты. Үҙҙәрен өйҙә көткән әсәйҙәренә лә шәп бүләк булды был

Сараның йомғаҡлау өлөшөндә түмәр-солоҡ умартасылығына экскурсия яһалды. Үҙ шөғөлөнә мөкиббән бирелгән, боронғо кәсептәрҙе тергеҙеүҙе изге ниәт иткән йүнсел хужа - Азамат Заһитуллиндың һәр һүҙен һәммәһе лә йотлоғоп тыңланы. Боронғо эш ҡоралдары күргәҙмәһе лә ир-егеттәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

Яңы һөнәр үҙләштереп, милли ризыҡтарҙан ауыҙ итеп, ошо үҙенсәлекле сараны ойошторған "Ир-егеттәр ҡороңа", шәп тәжрибә менән уртаҡлашҡан Азамат Заһитуллинға, ҡунаҡсыл хужабикә Зәйнәп Заһитулинаға, Ноҡат халҡына, Инйәр ауылы хакимиәтенә сикһеҙ рәхмәттәр уҡып, ғәйәт ҡәнәғәт таралышты ҡунаҡтар. Дәүерҙәр ҡаҡшатмаҫ рух көсөн дә, эске ҡеүәт үә берҙәмлекте лә тойғандай ине улар.

- Бындай саралар ата-бабаларыбыҙҙың йолаларын, рухи мираҫын йәш быуынға тапшырырға ярҙам итә; алған тәьҫораттар иһә, йылы хәтирәләр булып, ғүмер буйы һаҡлана. Сираттағы тағы бер сара 9 августа Баймаҡ районының Талҡаҫ күле янында планлаштырылған. Унда балалар менән өмә һәм күлде уратып йүгереү буйынса уҙыш ойоштороласаҡ. Ғаилә бәйләнештәрен нығытыу, сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү кеүек маҡсаттарҙы күҙаллаған был йыйында ла халыҡ ихлас ҡатнашыр, тип ышанам, - тине сараны йомғаҡлап Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһы депутаты, "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Зариф Байғусҡаров һәм иң әүҙем, булдыҡлы ир-егеттәргә, ишле ғаиләле атайҙарға, Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарға наградалар, Рәхмәт хаттары тапшырҙы.

**Гүзәл БИКМӘТОВА.**




АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘН АУЫРЫҺА...

## йән ҡурҡа

Алтын тотҡан алтынды таныр, күрмәй күргән еҙҙе лә алтын тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, кеше аҡылы уның тормошон мәңгелек көрәшкә әйләндерә.

**(Сара Бернар).**

Хәҡиҡәткә юл кәтөлмәгән бороломтар менән тулы.

**(Санскрит мәҡәле).**

Ысын дәрәжә йылға һымаҡ: ни тиклем тәрәнерәк булған һайын, тауышы аҡрынырак сыға.

**(Мишель де Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер дин әһеле мәсеттән ҡайтышлай таныш йортҡа инеп, унда йәшәүселәрҙең хәл-әхүәлен белешеп сығырға була. Барып инһә, йорт хужаһы тубыҡланып доға ҡылып ултыра һәм сүрәләр урынына ниндәйҙер буталсыҡ һүҙҙәр һөйләй: "Әй, Хоҙайым, - тип мөрәжәғәт итә был кеше Аллаға. - Һиңә яҡынларға булышлыҡ ит. Һинең тәнең бысранғанда, мин Һине йыуындырырға вәғәҙә бирәм. Мин бик яҡшы итексе, һиңә итек тегеп бирермен. Һине берәү ҙә хәстәрләмәгәндә, мин Һинең эргәңдә булырмын. Ауырыһаң, Һиңә дарыу алып килермен, ҡарармын. Мин ашарға ла оҫта бешерәм..." Дин әһеле танышының был доғаларын Хоҙайҙы мыҫҡыл итеү һымаҡ ҡабул итә һәм уны бүлдереп, ҡысҡырып уҡ ебәрә: "Туҡтат был ахмаҡлығыңды! Нимә һөйләйһең һин? Хоҙайға нимәгә кәрәк һинең итегең? Һин нисек итеп Уны йыуындырмаҡсыһың? Ул һинең ашарға әҙерләүеңә мохтаж тип уйлайһыңмы? Кемдән өйрәндең бындай доғаларға?" Йорт хужаһы уңайһыҙланып ҡына былай ти:"Мин доға ҡылырға берәүҙән дә өйрәнмәнем. Мин бик наҙан һәм ярлы кешемен. Башҡа эштәрҙе нисек итеп үҙем белгәнсә башҡарһам, доғаларҙы ла үҙем белгәнсә генә ҡылам. Ғөмүмән, үҙемдең шәхси тәжрибәм минең доғаларыма әйләнде. Мине дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәт улайһа, үтенеп һорайым..." Дин әһеле йорт хужаһын дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәтә һәм уның ихлас рәхмәтенә лайыҡ була. Илай-илай оҙатып ҡала ул дин әһелен. Дин әһеле лә, изге эш эшләнем, тип бик ҡәнәғәт ҡала. Хоҙай күрәме, беләме, тигән һымаҡ, ҡараштарын күккә төбәһә, Хоҙайҙан шундай һүҙҙәр килә: "Һин ерҙәге кешеләрҙе миңә ебәрергә тейешһең, әммә һин әле генә минең яратҡан бер әҙәмемде минән алыҫлаштырҙың. Һинең был кешегә өйрәткән "дөрөҫ" доғаларың доға түгел, сөнки доғалар бер ниндәй ҡағиҙә буйынса ла ҡылынмай..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.
1 582218 911006 25031

**Баш мөхәррир:** **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 07.08.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 07.08.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1477